РӘШИТ ШӘКҮР

# Тауҙарым, Далаларым

*Шиғырҙар, хикәйәттәр*

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1982

ББК 84 (Башҡ)
Ш 91

**Шәкүр Р.**

Ш 91 Тауҙарым, далаларым. Шиғырҙар, хикәйәттәр. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте. 1982.— 64 бит.

Был йыйынтыҡҡа Рәшит Шәкүрҙең тыуған республикабыҙ, еребеҙ, илебеҙ күрке, тормош, йәшәү шатлығы хаҡында шиғырҙары, фиҙакәрлекте сағылдырған хикәйәттәре индерелде.

Ш $\frac{70803-482}{М 121(03)-82}$ 108—82 ББК 84 (Башҡ)

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1982 й.



# Шиғырҙар

## ЙОНДОҘҘАР

И звезда с звездою говорит...

*М. Ю. Лермонтов*

Аяҙ күктә йым-йым итә
Күпме йондоҙҙар;
Илем, һинең күгеңдә лә
Мең-мең йондоҙ бар.

Йондоҙ менән йондоҙ, ана,
Төнөн серләшә,
Телдәр менән телдәр аша
Илдәр берләшә.

Үҙ телемдә, үҙ еремдә
Йырлайым бөгөн,
Бөтә телдәр бергә-бергә
Ҡабатлай: Ленин!

## ҠОШСОҒОМ

Ҡошсоғом минең, ҡошсоғом,
Ҡайҙарға юл тоттоң?
Киңлеккә, киңлеккә.
Йырҙарым минең, йырҙарым,
Ҡайҙарға йыр осто?
Бейеккә, бейеккә.

Иркендә, зәңгәр күк ҡуйынында
Ҡоштарҙың ояһы,
Ҡоштарҙың ояһы;
Бейектә, нәҡ ҡояш тиңендә,
Сафлыҡтың донъяһы,
Сафлыҡтың донъяһы.

Шуға ла иркле ҡошсоҡтар
Киңлеккә артыла,
Киңлеккә артыла;
Йөрәктән сыҡҡан йыр, тынмайса,
Ҡошсоҡтай талпына,
Ҡошсоҡтай талпына.

Мин һүнмәҫ бер ҡояш йөрөтәм
Йөрәктең түрендә,
Йөрәктең түрендә,
Йырыма ҡанаттар ҡуя ул
Күңелем күгендә,
Күңелем күгендә.

Ҡояшым — ул минең ҙур илем,
Ҡошсоғом — йырсығым,
Ҡошсоғом — йырсығым;
Ос һин, ос алыҫҡа, һин дә бит
Шул ҡояш ярсығы,
Шул ҡояш ярсығы!



## ТЫУҒАН ЙОРТОМ — УРАЛЫМ

Оло йортом — Уралым,
Ырыҫ-ҡотом — Уралым,
Мәңге тере ораным,
Мәңге торор ораным,
Һиндә минең йөрәгем,
Һиндә минең терәгем.

Һауаларға артылып,
Осар ҡоштай талпынып,
Яландарын, ҡырҙарын,
Йәншишмәләй һыуҙарын
Бар йыһанға балҡытып,
Буйын-һынын ҡалҡытып,
Алмас йөҙөк ҡашындай,
Аҫыл аҡыҡ ташындай,
Нурҙа уйнап ятҡан ер,
Моңдар йыйнап ятҡан ер.

Ай Уралым, таш йортом,
Башҡортомдоң баш йорто,
Ете ырыуға ҡор булған,
Бергә туплап ҡурғыған,
Арыҫлан йөрәк улдарын,
Һөләктәй һылыу ҡыҙҙарын
Үҙ иркендә үҫтереп,
Үҫтереп буй еткереп,
Минең данлы халҡыма,
Илдең изге антына
Бишек булған Уралым,
Ышыҡ ҡорған Уралым;
Ябырылып яу килһә,
Ят яҡтарҙан дау килһә,
Ҡаршы торған Уралым,
Оран һалған Уралым.

## ҠОШСОҒОМ

Ҡошсоғом минең, ҡошсоғом,
Ҡайҙарға юл тоттоң?
Киңлеккә, киңлеккә.
Йырҙарым минең, йырҙарым,
Ҡайҙарға йыр осто?
Бейеккә, бейеккә.

Иркендә, зәңгәр күк ҡуйынында
Ҡоштарҙың ояһы,
Ҡоштарҙың ояһы;
Бейектә, нәҡ ҡояш тиңендә,
Сафлыҡтың донъяһы,
Сафлыҡтың донъяһы.

Шуға ла ирекле ҡошсоҡтар
Киңлеккә артыла,
Киңлеккә артыла;
Йөрәктән сыҡҡан йыр, тынмайса,
Ҡошсоҡтай талпына,
Ҡошсоҡтай талпына.

Мин һүнмәҫ бер ҡояш йөрөтәм
Йөрәктең түрендә,
Йөрәктең түрендә,
Йырыма ҡанаттар ҡуя ул
Күңелем күгендә,
Күңелем күгендә.

Ҡояшым — ул минең ҙур илем,
Ҡошсоғом — йырсығым,
Ҡошсоғом — йырсығым;
Ос һин, ос алыҫҡа, һин дә бит
Шул ҡояш ярсығы,
Шул ҡояш ярсығы!



## ТЫУҒАН ЙОРТОМ — УРАЛЫМ

Оло йортом — Уралым,
Ырыҫ-ҡотом — Уралым,
Мәңге тере ораным,
Мәңге торор ораным,
Һиндә минең йөрәгем,
Һиндә минең терәгем.

Һауаларға артылып,
Осаҡ ҡоштай талпынып,
Яландарын, ҡырҙарын,
Йәншишмәләй һыуҙарын
Бар йыһанға балҡытып,
Буйын-һынын ҡалҡытып,
Алмас йөҙөк ҡашындай,
Аҫыл аҡыҡ ташындай,
Нурҙа уйнап ятҡан ер,
Моңдар йыйнап ятҡан ер.

Ай Уралым, таш йортом,
Башҡортомдоң баш йорто,
Ете ырыуға ҡор булған,
Бергә туплап ҡурғыған,
Арыҫлан йөрәк улдарын,
Һөләктәй һылыу ҡыҙҙарын
Үҙ иркендә үҫтереп,
Үҫтереп буй еткереп,
Минең данлы халҡыма,
Илдең изге антына
Бишек булған Уралым,
Ышыҡ ҡорған Уралым;
Ябырылып яу килһә,
Ят яҡтарҙан дау килһә,
Ҡаршы торған Уралым,
Оран һалған Уралым.

Аҡ намыҫын халҡымдың,
Аҡһаҡалдар аҡылын,
Сал тарихтең тауышын,
Шатлыҡтарын, ҡайғыһын,
Алдар һымаҡ ирҙәрҙең,
Салауаттың, Кинйәнең
Утлы эҙен онотмаҫ,
Утлы һүҙен онотмаҫ,
Шоңҡар йәнле Уралым,
Толпар һынлы Уралым.

Ун етенең таңында,
Тиңлек тыуған сағында
Хаҡлыҡ килгәс халыҡҡа,
Шатлыҡ килгәс халыҡҡа,
Әкиәт, йомаҡ ҡартындай,
Мәңге тере батырҙай,
Байлыҡтарын, мөлкәтен,
Алтын-көмөш ҡиммәтен,
Нефть, яҡут, тимерен,
Ҡатлам-ҡатлам күмерен,
Һыуҙарының ҡеүәтен,
Ут яндырыр ҡөҙрәтен,
Ишелеп үҫер игенден
Муллыҡ алып килерен,
Яландарҙың, тауҙарҙың
Бейеклеген, киңлеген
Үҙ йәнендәй күргән ер,
Үҙ йәненә үргән ер.

Минең тыуған халҡымды,
Минең тоғро антымды,
Башҡорт менән урыҫты,
Дуҫлыҡ тигән ырыҫты
Һаҡлап торор Уралым,
Яҡлап торор Уралым;



Төрлө-төрлө милләтте
Иңдәрендә тирбәтеп,
Батырлыҡҡа дан йырлап,
Татыулыҡҡа дан йырлап,
Балҡып торор Уралым,
Ҡалҡып торор Уралым.

Шоңҡар йәнле Уралым,
Толпар һынлы Уралым,
Мәңге тере ораным,
Мәңге торор ораным,
Таш тамырым, таш йортом,
Башҡортомдоң баш йорто,
Һиндә минең терәгем,
Һиндә минең йөрәгем.

## ҠАНАТЫМ

Ни ҡанатлы ерҙә?
Аттың толпары.
Кем ҡанатлы илдә?
Ирҙең солтаны.
Ҡуш ҡанатын елпеп,
Оса сал бөркөт;
Бөркөт — тауҙа, егет —
Яуҙа ил күрке.
Шатлыҡ тубымы ни
Һабан турғайы,
Йырҙарынан ҡоя
Ҡояш нурҙарын.
Ҡанат аҫты ҡаурый
Ҡара ҡарлуғас,
Төйәгенә ҡайта,
Күкрәп яҙ тыуғас.
Һандуғасҡай һайрай
Һары таллыҡта,

Ҡанаттары уның —
Йырсы халыҡта.
Ниндәй ҡанат икән
Минең йөрәктә,
Ниндәй ғәйрәт таша
Ҡеүәт — беләктә?
Бөркөт ҡанаты ул
Туған халҡымдың,
Шул ҡанаттар менән
Үргә ҡалҡындым.

## ИЛ ЙӘШЛЕГЕ — КОМСОМОЛ

Ун һигеҙҙең шанлы октябрендә
Ил ишетте уның ауазын,
Ерҙә тыуҙы шул саҡ йәш баһадир —
Коммунистик йәштәр союзы.
Октябрҙең еңеүҙәрен яҡлап,
Ут эсендә тыуҙы был батыр;
Коммунистәр менән бер сафтарға,
Ҡулға ҡорал тотоп ул баҫты.
Ленин исеме менән йөрәгендә
Халҡым социализм төҙөнө.
Илгә дошман килгәс,
беҙ яуланыҡ
Ленин исеме менән еңеүҙе.
Сиҙәмдәге тәүге киң бураҙна
Байкал — Амур тигән ҡорос юл,—
Был да һинең данлы биографияң,
Илдең йәш батыры — комсомол.
Ун һигеҙҙә тыуған был батырға
Ун һигеҙ йәш һаман, ун һигеҙ.
Алмашсылар!
Хеҙмәт һәм көрәш эстафетаһын
Шул батырҙан ҡабул итегеҙ!



## «ҺАНДАР» ТИГӘН ЦИКЛДАН

### Бер

Бер ул — берҙән-берең, күҙ нурҙарың һинең,
Иң ҡәҙерле, иң мөҡәддәс Тыуған илең;
Берҙән-берең — йырлы, моңло тыуған ерең,
Сәңгелдәктән тыңлап үҫкән туған телең.

Бер ул — һинең, илде һөйөп, янып-көйөп,
Көнөн-төнөн тибеп торған йөрәк хисең;
Берҙән-бере һәм күҙ нуры Тыуған илдең —
Һин ул, кешем,
һинең изге эшең.

### Ике

Һауаларҙа ҡанат йәйгән ҡош булыр ул,
Ҡошҡайҙарҙың ҡанаттары ҡуш булыр ул;
Ҡуш йөрәкле шоңҡарҙары булыр илдең,
Ҡуш ҡанатлы толпарҙары булыр илдең.

Ҡуш йөрәкле, ҡуш ҡанатлы халҡым минең —
Алтын-көмөш хәзинәһы алтын илдең;
Алтын илем, алтын илдә алтын халҡым,
Һеҙҙе яҡлау, һеҙҙе һаҡлау — минең антым.

## КЕШЕ БӨЙӨК

Кеше бөйөк, күккә ашҡан ҡая кеүек,
Кеше бөйөк, бейектәге йондоҙ кеүек;
Кеше бөйөк, ҡояш кеүек ҡарашы,
Кеше үҙе — уй һәм фекер ҡояшы.

* * *

Миллионлы халҡым, миллионлы,
Миллион аҡыл, миллион моң,
Мин донъяға үҡталғанмын
Уйы менән миллиондың.

## БЕҘ

Беҙ — дәүерҙең тоғро балалары,
Маҡсат — изге, күңел — ҡанатлы,
Үткәндәрҙе йыйып йөрәктәргә,
Төбәгәнбеҙ алға ҡарашты.

## ЕРЕМ, ИЛЕМ, ТЕЛЕМ

Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә,
Минең йәшәү тамырҙарым —
Башҡорт ерендә.
Өмөттәрем, хыялдарым,
Йөрәк тибешем —



Киң Уралым, йырлап аҡҡан
Һинең инешең;
Алыҫ-алыҫ яңғыраған
Моңло йырҙарым —
Мең инеште бергә йыйған
Көмөш һыуҙарың.
Яуҙар сапҡан улдарыңдың
Көсө — беләктә,
Ҡайғылары, шатлыҡтары —
Минең йөрәктә.
Күпме ҡайғы, күпме шатлыҡ
Күрһә тыуған ер,
Ер күргәнде, ил күргәнде
Һаҡлай туған тел.
Миллион кеше күкрәгендә
Күкрәй ул бөгөн,
Йөҙ утыҙҙың[1] араһында
Тиңдәрҙән-тиңем.
Туған телем, һин халҡымдың
Былбыл тауышы,
Быуаттарҙан-быуаттарға
Ҡанат ҡағышы.
Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә,
Минең йәшәү тамырҙарым —
Башҡорт ерендә.

## БӨЙӨК ҺЫБАЙ

Батыр һыбай — Өфө тауҙарында,
Ҡая ташлы Иҙел ярында,
Иңдәрендә уның — күк көмбәҙе,
Дала йәйрәп ята алдында.

---

[1] Хәҙерге ваҡытта Советтәр Союзында йөҙ утыҙ тел иҫәпләнә.

Салауатың, халҡым, Салауатың,
Быуат ҡатламдарын аҡтарып,
Күтәрелгән Урал күкрәгенә,
Тоғро толпарына атланып.
Ат өҫтөндә батыр көнөн-төнөн,
Әйтерһең дә, посҡа баҫҡан ул,
Изге көрәш яуҙарында янып,
Мәңгелеккә шулай ашҡан ул.
Азатлыҡтың яҡты хәбәрсеһе,
Әй һин, Урал улы Салауат,
Йөрәктәрҙә йәшен йәшнәүҙәре —
Ул һинәнме ҡалған аманат!
Башҡортомдоң революцияға
Сарсап барып ингән сағында,
Еңеү маршы булып яңғыраған
Һин инеңме илдең һағында!
Кешелектең үткән юлдарында
Һәр бер заман — яңы бейеклек,
Бөтә дәүер, бөтә халыҡтарҙа
Салауаттар — мәңге бөйөклөк.
Һәйкәл тора Урал күкрәгендә,
Ҡая ташлы Иҙел ярында,
Салауатың, утлы аманатың,
Тыуған тупраҡ, һинең һағыңда!
Ҡаяларҙан бейек күтәрелгән
Теп-тере ат, тере аҙамат;
Мәңгелеккә илдән һөргәйнеләр,
Мәңгелеккә ҡайтты Салауат!

* * *

Һинең менән, ерем, тын алышым,
Уйҙарымдың талғын ағышы;
Таң һарыһы һымаҡ тын һағышым,
Һәр тауышың — ҡанат ҡағышым.



Һин нур яҡтың минең күҙҙәремә,
Йыр уяттың минең әҙҙәремдә;
Шатлыҡтарҙың шиңмәҫ шишмәләре
Йән ереккән тыуған ерҙә генә.

## ЙӨРӘГЕМДӘ — ҠОЯШ

Баш осомда — ҡояш яҡтыһы,
Уйҙарымда — ҡояш сатҡыһы,
Йөрәгемдә ҡояш йылмая,
Күҙҙәремдә ҡояш нурлана.

Кешеләрҙе ҡояш уята,
Хәрәкәткә ҡояш ҡуҙғата,
Ергә таңды ҡояш килтерә,
Таң яҡтыһын ҡояш еткерә.

Көрәшсене ҡояш етәкләй,
Ҡараңғыны ҡояш тетмәкләй,
Бейеклеккә ҡояш ҡул болғай,
Яманлыҡҡа ҡояш юл ҡуймай.

Баш осомда — ҡояш яҡтыһы,
Уйҙарымда — ҡояш сатҡыһы,
Йөрәгемдә ҡояш йылмая,
Күҙҙәремдә ҡояш нурлана.

## КӨМӨШ ТАУЫШ, ЕҘ ҠЫҢҒЫРАУ

Күңелемә бигерәк яҡын
Ҡыңғырау ҡағыштары,
Көмөш тауыш, еҙ ҡыңғырау —
Ерҙең шат тауыштары.
Сыңғыр-сыңғыр был сыңдарҙа
Бар шишмәнең йырҙары,

Бар ҡояшлы иртәләрҙең
Алтын-көмөш нурҙары.
Ҡыңғырауҙар ҡаҡҡан саҡта
Ер ҙә, күк тә һөйөнә,
Мәктәп беҙҙе ҡаршы ала
Ҡыңғырауҙар көйөнә.
Тыуған илкәй, иркен еркәй,
Яҡты һинең көндәрең,
Еҙ ҡыңғырау тауышында —
Һинең наҙлы өндәрең.
Берҙәм, тығыҙ сафтарҙа беҙ
Үҫеп етербеҙ әле,
Имен булһын Тыуған илдең
Ҡояшлы иртәләре!

## ШУНДАЙ ЙЫР ЙЫРЛАРМЫН

Шундай бер йыр йырлармын —
Моңһоҙҙоң йәне тетрәр,
Ете ҡат күк өҫтөндә
Минең тауышым күкрәр.

Шундай бер йыр йырлармын —
Таштар ҙа сәскә атыр,
Шиғриәт тауҙарында
Юйылмаҫ эҙҙәр ятыр.

Шундай бер йыр йырлармын —
Боҙҙарҙы иретерлек,
Һатлыҡтың йәнен алып,
Ебекте ир итерлек.

Йырлармын шундай бер йыр, —
Аһ, тылсым ҡанаттары
Мәңгегә әсир итер
Одиссей караптарын.



## ҺАУАЛАРҘА — ЙОНДОҘ

Ҡаплап ерҙе, ҡаплап күкте
Килә төн;
Ай һәм йондоҙ сәфәр сыға
Аяҙ төндәр, аман төндәр
Еткәстен.

Айлы төндә уттар яна
Алтындай,
Күк ҡуйынында, сабый һымаҡ,
Йоҡлай Ерем, эшсән Ерем...
Һаҡлап уның наҙлы мәлен,
Балҡый ай,
Яҡты ай.

Әлдә әле күк йөҙөндә
Айҙар бар,
Бар ғаләмдең мең-мең күҙе —
Йондоҙҙар.

Күктең күрке — балҡып янған
Йондоҙҙарҙа,
Көләс йөҙлә түп-түңәрәк
Тулы айҙа;
Ерҙең күрке — йондоҙға тиң
Улдар барҙа,
Бер бите ай, бер бите көн
Ҡыҙҙар барҙа.

## КҮКРӘГЕМДӘ БЕР МОҢ ТЫУҘЫ

Ерҙә яңы бер көн тыуған мәлдә
(Эй һеҙ, көндәр, донъя яҡтыһы!),
Мең-мең уйҙы бер туплауға йыйып,
Һайлап алдым иң-иң татлыһын.

Күкрәгемдә шул саҡ бер моң тыуҙы,
Күкрәп-тетрәп, моңдоң ҡеҙрәте
Урал һырттарына алып китте,
Хыял ҡанатында тирбәтеп.
Тауҙарымда, күрәм, ҡояш балҡый,
Яҡтылыҡҡа ашҡан Уралым;
Иңләп-буйлап, бында бәхет йөрөй,
Шатлыҡ әйҙәй илдең улдарын.
Күк толпарҙар, таңға ҡанат йәйеп,
Әкиәттән күскән ысынға,
Буранбайҙың көйөн көйләй бирәү,
Йәнен биреп ошо тылсымға.
Ҡарт тауҙарым Ерҙең күкрәгендә
Ҡалҡан һымаҡ ята ҡалҡынып,
Сал бөркөттәр саңҡып оса бында,
Аҡ һыуҙарым аға алҡынып.
Уралҡайым, ерҙә, күктә әллә
Сәңгелдәге һинме моңдарҙың...
Шул моңдарға тыңләп көйләйем мин
Күңелемдең шигри ҡылдарын.

## ҠАРАТАУҘА ЙӘЙГЕ ТАҢ

Ҡаратауҙа ҡараңғы төн,
Ҡараңғы төн, ҡара урман;
Тау битенә ҡара төндә
Кемдәр усаҡ яғып ҡуйған?

Кемдәр унда — төн йөҙөндә
Янған утҡа табынғандар,
Тауға менеп, ташҡа баҫып,
Кемдәр йондоҙ ҡабыҙғандар!

Кемдәр улар, күтәрелеп
Ерҙән бер аҙ бейегерәк,



Таңды ҡаршы алыусылар
Бүтәндәрҙән элегерәк!

Күктә, ана, күптән инде
Күренмәйҙәр аҡ йондоҙҙар,
Ҡара төндә йондоҙ һымаҡ
Усаҡтағы утлы ҡуҙҙар.

Ҡараңғылыҡ шыйыулыраҡ
Була бара һаман-һаман,
Беҙҙең был ер ашыға бит,
Ашыға бит таңға табан.

Яҡты тыуа, ҡыуа-ҡыуа
Ҡаратауҙан ҡара төҫтө;
Уяларҙы һөйөп, наҙлап,
Аҡ биләүҙәй томан төштө.

Ҡаратауҙа ҡара урман —
Ул да таңды көткән, көткән,
Алдан алһыу уҡтар сөйөп,
Ҡояш таңды хәбәр иткән.

Көтөп алған алһыу суҡтар —
Бына улар устарымда,
Төнө буйы усаҡ яғып,
Таң аттырған дуҫтарымда.

Эй таң ата! Алһыу-алһыу
Таңдың тыуған минуттары.
Ҡараштарҙа ҡалһын-ҡалһын
Яҙмыштарҙың был уттары.

## МАНДОЛИНА

Мандолина, мандолина,
Мандолина ҡылдарында,
Әйтерһең дә, ярҙан-ярға,
Яҙғы һыуҙар ярһып аға.
Яҙғы һыуҙар, яҙғы уйҙар...
Аҡтарылып аға боҙҙар,
Ярһып-ярһып аға йылға,
Яҙғы һыуҙай, яҡты донъя.
Ана, бераү баҫҡан боҙға,
Боҙ өҫтөндә — тере ҡуҙҙар...
Асманға ул асып йөҙөн,
Һәр тарафҡа һөйләй һүҙен.
Айҙан алып, ап-аҡ нурҙар
Һибеп бара яҡ-яғына,
Ҡуптарылып килгән халыҡ
Ташҡын һыуҙың ярҙарына.
Бына бер мәл йырсы егет,
Юғарыға үрелә биреп,
Бер шәлкем нур ҡосоп ала,
Күкрәгенә ҡыҫып ала;
Нурҙарҙы ҡыл итеп сиртә,
Һыуҙар аға, боҙҙар китә,
Боҙ өҫтөндә, ялҡын булып,
Алтын бер йыр балҡып китә.
Йыр балҡышы, йыр алҡышы
Баҙлап бара ташҡындарҙа,
Йырға йәнен фиҙа ҡылып,
Тора халыҡ ташҡын ярҙа.
Ярҙан-ярға, ярҙан-ярға
Аға һыуҙар, аға боҙҙар,
Күкрәктәрҙә күк күкрәтеп,
Аға уйҙар, аға уйҙар.
Аҡты һыуҙар, китте боҙҙар,
Ярҙарына ҡайтты йылға;





Ташҡындарға китте егет...
Нурҙа уйнап ҡалды йырҙар.
Зың-зың иткән, ай, зың иткән
Мандолина ҡылдарында.
Ҡалды йырҙар, ҡалды моңдар
Ер һәм ҡояш юлдарында.

## ТӨНГӨ КҮГЕМ

Төнгө күгем хәтерләтә миңә
Әкиәттәге серле донъяны:
Ҡап уртала — түп-түңәрәк йөҙлө
Һылыу айҙың нурға тулғаны;
Йыһан төпкөлөнән йондоҙҙарҙың
Сыңғыр-сыңғыр сыңы ағыла;
Ҡыҙыҡмаймы икән башҡорт ҡыҙы
Сулпы итеп йондоҙ тағырға!
Ялтлап тора күктә алтын сүмес,
Бер ситтәрәк ҡалған нишләптер;
Кемдәр генә уны ҡуйҙы икән
Ете йөйлө итеп эшләтеп?

## ТӘҮГЕ ҠАР

Леп-леп кенә тағы бына
Ҡырпаҡ ҡар яттЫ;
Тыуған ерем, йөҙөң һинең
Ниндәй ап-яҡты!

Тынды тамам талғын аҡҡан
Йылға-һыуҙарым,
Ап-аҡ юрған ябындылар
Ялан-ҡырҙарым.

Шымып ҡалды Уралымда
Ҡарағай, шыршы...
Төрәнеп мамыҡ аҡ ҡарға,
Көтәләр ҡышты.

## ШАТЛЫҠТАР

Шатлыҡтар — шат ҡоштар,
Һыуҙан аҡ шатлыҡтар,
Һөттән пак шатлыҡтар,
Аҡ толпар, аҡ шоңҡар,
Шатлыҡтар, шатлыҡтар.

Шатлыҡтар — шат ҡоштар,
Күкрәктә — алҡыштар,
Ут ҡоштай ут булып,
Толпарҙай ҡот булып,
Килегеҙ, шатлыҡтар,
Шатлыҡтар — шат ҡоштар.

## ВАҠЫТ

Ваҡыт ул — мәңгелек ел-дауыл,
Ер шарын, ғаләмде урар ул.

Ваҡыт ул — йәшәйеш һулышы,
Донъяның ғәжәйеп булмышы.

Ваҡыт ул — тынғыһыҙ, тыйғыһыҙ,
Йәне бар һис тынып торғоһоҙ.

Ваҡыт ул — үҙенсә бер ярыш,
Тауҙайны эшең, йә бер ҡарыш.



Ваҡыт ул — серле бер йомғаҡтай,
Асыҡ та, йомоҡ та йомаҡтай.

Ваҡыт ул — туҡталмаҫ бер карап,
Елдерә гел алға ул ҡарап.

## БӨТӘ НӘМӘ АЛҒА ТӨБӘЛГӘН

Бөтә нәмә алға төбәлгән:
Олатайҙан ҡалған уҡ һәм йыр;
Һыу ҙа тауҙан алға тәгәрләй,
Алға илтә хатта урау юл.

Туймай донъя, туймай тиҙлеккә,
Тиҙме тиҙлек беҙҙең күҙлектән?
Ҡулдарымда — толпар теҙгене,
Уйҙарымда — йондоҙ тиҙлеге.

## АЛЬПИНИСТӘР ЙЫРЫ

Ҡояшта ҡыҙынып,
Һыуыҡта сынығып,
Ҡоростай
Нығытып
Ҡулдарҙы,
Үрләйбеҙ беҙ күккә,
Бейектән-бейеккә
Һалабыҙ
Иң текә
Юлдарҙы.
    Беҙ яҡын менәбеҙ
    Ҡояштың үҙенә,
    Ҡыйыулыҡ тамғаһы —
    Альпинист әҙендә.

Артылып тауҙарға,
Етһәк тә ҡайҙарға,
Илдең беҙ
Ҡарашын
Тоябыҙ;
Бик бейек ерҙәрҙә,
Дауылдан, елдәрҙән
Иң ныҡын
Дуҫлыҡтың
Ҡоябыҙ.
Беҙ яҡын менәбеҙ
Ҡояштың үҙенә,
Ҡыйыулыҡ сатҡыһы —
Альпинист эҙендә.

## ҺАУМЫҺЫҒЫҘ, ЯҘҘАР!

Һаумыһығыҙ, яҙҙар,
яҡты айҙар,
яҡты көндәр,
яҡты хыялдар!..
Һеҙ бит — күктән аҡҡош булып
теҙелешеп уҙып барған
ал яулыҡлы
аҡ һылыуҙар,
аҡ йондоҙҙар!

Эй һеҙ, яҙҙар,
яҙғы наҙҙар!
Ҡарағыҙсы,
беҙҙең күҙҙәр, беҙҙең йөҙҙәр
һеҙҙе һөйөп тәбрикләйҙәр,
хатта беҙҙең ҡырыҫ елдәр,
һеҙҙе күреп, шыбырҙайҙар
иркә һүҙҙәр.



Яҙғы айҙар,
яҙғы көндәр, яҙғы төндәр,
ашыҡмағыҙ әле улай;
ер-һыуҙарҙы урай-урай,
үткән саҡта Урал аша
ҡылһағыҙсы бер тамаша:
был тауҙарҙа, далаларҙа
ерҙән алып күккә ҡәҙәр
күтәрелгән бер бәһлеүән,
Башҡортостан — ул аҫыл йән.

Күкрәгендә был батырҙың
күкрәп торған кестәр ята,
янартауҙай һүнмәй торған
икһеҙ-сикһеҙ хистәр ята.
Ашыҡмағыҙ,
аҡҡоштарым!
Талғын-талғын
елпеп ҡанат,
уҙығыҙ һеҙ Урал аша,
Уралтау ҙа, һеҙҙе күреп,
ҡылһын әйҙә бер тамаша.

Аҡ ҡоштарым,
аҡ ҡыштарҙы
йәшел мәлгә тоташтырып,
яҙ килтергән, наҙ килтергән
пак ҡоштарым —
теҙелешеп уҙып бара,
һауаларҙа был айҙарҙа
ер-яңы йыр һуҙылып бара.

Юҡ-юҡ,
берүк, һеҙгә, кешеләрем,
булмаһын ул аҡҡош йыры,
булһын бары: «Яҙ!»,
«Яҙ!» — тиеп,

ап-аҡ ҡышты наҙлы яҙға
тоғаштырған
паклыҡ йыры,
күңелдәргә ҡанат ҡуйыр
шатлыҡ йыры,
шатлыҡ йыры.

## МИН ДАЛАЛА ТЫУҘЫМ

*Ауылдаштарыма*

Мин даланан килдем ҡалаға,
Ә йөрәгем йәшәй далала;
Сәңгелдәгем, моңом — сал дала,
Далаларҙа йәнем һаҡлана.

Ҡарт даламдың утлы ҡояшын,
Меңәр йыллыҡ дарья һағышын
Күкрәгемә һалып килтерҙем,
Күкрәүҙәрҙе алып, мин килдем.

Яланымдың йәйғор төҫтәрен,
Томраларын, әрем еҫтәрен
Алып килдем шаулы ҡалаға,
Ә табынам һаман далаға.

Дала ирке ингән уйыма,
Дала күрке һеңгән йырыма,
Мин далала тыуҙым, далала,
Дала рухы йәшәй ҡалала.



## ҠЫЛҒАНДАР

Ҡылғандар, ҡылғандар,
Далаға тулғандар,
Сәстәрен ҡояшҡа
Тағатып ҡуйғандар.

Ел үрә, ел һүтә
Толомон ҡылғандың,
Елкетә, елкетә
Яланда тыуған моң.

Сал сәстәр, сал төҫтәр —
Ерҙең саф һағышы,
Сәңгелдәк көйөндәй
Тыуған ер тауышы.

## МАЙ АЙЫ

Килеп етте, елеп етте
Ал байраҡлы май айы,
Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең
Шатлыҡтарға бай айы;
Эй май айы, май айы!

Шундай ихлас күктә ҡояш,
Йөҙө, гүйә, һары май,
Көн буйына ерҙе һөйөп,
Йылмая ул арымай;
Эй яҡты ай, яҡты май!

Майға ҡарап, айға ҡарап,
Кейенә ер йәшелдән,
Йәшел үлән өҫтәрендә
Иркәләнә йәш елдәр;
Эй йәшел ай, йәшел май!

Ошо айҙа туғайҙарҙа
Моң тибрәтә һандуғас,
Ниндәйен ҙур бәхет бит был,
Һандуғаслы яҙ тыуғас;
Эй наҙлы ай, наҙлы май!

Ең һыҙғанып, йөрөй был ай
Яландарҙа, ҡырҙарҙа,
Уңғанлығы менән оҡшаш
Беҙҙең эшсән ҡыҙҙарға;
Эй матур ай, матур май!

## УРАЛЫМДЫҢ АҒЫН ҺЫУҘАРЫ

### Йылғасығым

Шарлап аға кеҫкәй йылға,
Уйынсыҡтай,
Уйым-уйым шарламалар,
Тап орсоҡтай,
Зыр әйләнеп, бер туҡтауһыҙ
Уйнап тора,
Йылғасығым, йырсы ҡыҙҙай,
Йырлап тора.

Ҡарағыҙсы, зәңгәр күктә
Алтын ҡылдар
Һыу өҫтөнән ҡояшҡаса
Тартылғандар.
Дәртләнешеп уйнай елдәр —
Тилбер ҡолдар,
Һауаларым, ерем тулы
Моңдар, моңдар,
Уйнағас ни, ҡояш нурын
Кейгә һалып,
Ерҙә һыуҙар йырлап аға,
Аға ярһып.

## Уй

Уй һыуҙары аға уйһыуҙарҙан,
Уйылып ҡына ҡалған уй һымаҡ;
Булырмы ла ерҙә, ай, булырмы
Уйсан йылға тағы Уй һымаҡ.

Уйҙарыңды тартһа Уй буйҙары,
Урау-урау илде урарһың,
Уралҡайҙың уйҙар булып аҡҡан
Сал тарихен уйлап йырларһың.

## Дим

Йәйге көндә Дим өҫтөндә
Уйнай шат ҡояш;
Ниндәй рәхәт, ниндәй һәйбәт,
Ҡояш балҡығас.
    Иркен тугайҙар,
    Шундай киң һауа!
    Күктең бар нуры
    Еремә яуа.
Әллә инде ысын көмөш
Һыуы был Димдең,
Йыйғанмы ул йылылығын,
Наҙын илемдең.
    Донъялар матур,
    Күгем киң минең,
    Мәңгелек йырға
    Димем тиң минең.

## Өршәгем

Ялан ерҙе ярып ҡап уртаға,
Төньяғына уҡтай тартылып,



Өршәк-йылға аға талғын ғына,
Бөгөлөргә хатта тартынып.

Толомдары һымаҡ һылыу ҡыҙҙың,
Талдар, туғайлыҡтар һуҙылған;
Ян-яғына, көмөш тәңкә булып,
Йоморо-йоморо күлдәр уйылған.

Йәйрәп ята йәшел диңгеҙ бында —
Икһеҙ-сикһеҙ ҡырҙар, баҫыуҙар,
Байкал-күлгә тиңдер тәрәнлектә
Күкте түшәп ятҡан ятыуҙар.

Эй Өршәгем минең, татыр һыуың
Татлы күрәм юкә балдан да;
Ҡан тамыры итеп, һинеме әллә
Йөрәгемә уйып һалғандар.

## Стәрле

Стәрлекәй, селтәрлекәй,
Селтер-селтер һыуҙары,
Гөлбаҡсалай балҡып тора
Стәрлеһыу буйҙары.

Стәрлекәй, селтәрлекәй,
Ярҙан-ярға баҫмаһы;
Йәшел ялан өҫтәрендә —
Ерҙең аҫыл таҫмаһы.

## Эҫемкәйем, Эҫемем

Уралымда бер йылға бар —
Эҫеме ул, Эҫемме?
Халҡым ҡайҙан тапты икән
Быңдай серле исемде!

Серҙәре күп әле ерҙең,
Беҙгә — шуны сисергә,
Тыуған яҡта шишмәләрҙән
Ятып һыуҙар эсергә.
Алҡын һыуым, һалҡын һыуым,
Эҫемкәйем, Эҫемем,
Телдең тере бер тамсыһы —
Исемкәйең, исемең.

## Арғымаҡ [1]

*(Михаил Садовскийҙән)*

Тәрәндә, йырында
Юрғалай, атлыға
Кескенә бер йылға —
Ул йылғыр Арғымаҡ.
Арғымаҡ буйында
Тал ғына, тал ғына;
Һап-һалҡын һыуҙары
Һыуһынды ҡандыра.
Аға ул урғылып,
Яғымлы йыр булып:
— Әйҙәгеҙ, кинәнеп
Эсегеҙ һыуымды,
Мин һеҙгә йырлармын
Иң яҡшы йырымды.
Мин хеҙмәт итәмен кешегә,
Ат һымаҡ, тогромон эшемә.
Кем минең буйымдан
Талмайса югерә,
Оҙатып ҡуйырмын
Уны мин Иҙелгә!

[1] Арғымаҡ — Башҡортостандың Дүртөйлө районындағы йылға исеме.



## МАЛИН-ҠАЛА

Был уйынды төрлө яҡтарҙа төрлөсә атап йөрөтәләр: «ҡала башлығы» ла, «тау минеке» йәиһә «алтынтау» ҙа тиҙәр уны, ә беҙҙә ул — «малин-ҡала».

Малин-ҡала, малин-ҡала,
Ҡыҙыҡһынһаң, әйҙә һин дә
Уйнап ҡара, уйлап ҡара:
Ниндәй һүҙ был, ниндәй мәҙәк?
Ҡайҙан ҡалған ундай ғәҙәт?

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Көсөңдө һин һынап ҡара,
Һынап ҡара, уйнап ҡара,
Юғарыға буйлап ҡара;
Беҙҙең ауыл урамында,
Ҡыштың ҡарлы буранында
Бөгөн дә бит алыш бара,
Бөгөн дә бит ярыш бара.

Ауылдағы алты малай
Бер-бер артлы еңеү яулай.
Малин-ҡала, малин-ҡала...
Әйтерһең, был — крепость-ҡала,
Шул ҡаланы алып ҡара,
Алғас, унда һис юғында

Тик бер минут тороп ҡара.
Һырғалаҡта алыш бара,
Һырғалаҡта ярыш бара,
Бераү үргә менеп бара,
Бераү, ана, елбер-елбер,
Түбән табан елеп бара.

Эй ярыштың ҡыҙған сағы,
Аҡ ҡарҙарҙың туҙған сағы,
Бала саҡтың ҡар тауҙарын
Яулай-яулай уҙған сағы!

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Бераү үргә менеп бара,
Ҡамыр батыр һымаҡ ҡына,
Ййлап ҡына, майлап ҡына,
Бик күптәрҙе еңеп бара,
Элеп алып һелкеп һала;
Әммә еңеп бөткәс кенә,
Тауға менеп еткәс кенә,
Кемдер уны төртә уңдан,
Кемдер уны төртә һулдан;
Бераү үрләй алғы яҡтан,
Бераү үрләй артҡы яҡтан,
Ундағы ла һөжүм итә,
Һулдағы ла һөжүм итә.
— Тау — минеке! — ти алдағы,
— Тау — минеке! — ти арттағы,
Арттағылар, алға сығып,
Арымайса, талмайынса,
Үрмәләйҙәр тауға тағы.

Аллы-артлы, аллы-артлы
Еңеү яулай малай заты,
Минут һайын тау башында
Ҡалҡып сыға яңы батыр.



Алмаш-тилмәш, алмаш-тилмәш,
Бер сәғәттә алты батыр
Алмашына унар тапҡыр.
(Алты түгел, кәрәк икән
Булһын бында алтмыш малай,
Алтмышы ла аллы-артлы
Тауға менеп баҫыр шулай,
Тауҙы яулап төшөр шулай.)

Алты малай, алты шалай —
Беҙҙең ауыл урамында,
Алыш бара, биреш бара
Ҡыштың ҡарлы буранында.

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Һырғалаҡта ярыш бара,
Зыҡ ҡубышып, йән-фарманға
Уйнай бында алты бала;
Еңеп сыҡты алтыһы ла,
Еңелеүсе юҡ арала.
Ғәжәп тә ул, мәҙәк тә ул,
Бына шундай малин-ҡала!

## ЫРЫМБУРЫМ — МОҢЛО ЙЫРЫМ

Ғүмеремдең бер мәлендә
Килдем бына Ырымбурға,
Ырымбурға, боронғо бер
Йәйрәп ятҡан моңло йырға.
Эй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә тағы берәй көнгә
Бында тороп ҡалаһы,
Эй Ырымбур далаһы...
Ырымбурҙа, моңло йырҙа
Заманалар тоташҡанмы,

Замананың заманаһы —
Беҙҙең дәүер тоташ данмы.
Данмы, ана, алтын дала,
Икһеҙ-сикһеҙ иген ҡыры,
Данмы дала ҡосағында
Яңғыраған иген йыры.
Данмы, данмы йәшел туғай,
Бейектәге ҡоштар юлы,
Данмы хеҙмәт фронтында
Замандаштың алтын ҡулы.
Дан түгелме далаларҙың
Ауылдары, ҡалалары,
Ауылдарҙың, ҡалаларҙың
Көләс йөҙлө балалары.

Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Иркен икән, күркәм икән
Далаларҙың һауаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Ырымбурым, моңло йырым,
Тәрәндәме тамырҙарың,
Үттеләрме замандарҙың
Елдәре лә дауылдары.
Һөйләйҙәрме, көйләйҙәрме
Ап-аҡ сәсле ҡылғандарың
Бүгәс менән Салауаттың
Бергә-бергә булғандарын;
Яландарҙа Пушкин күргән
Ырымбурҙың буrандарын;
Башҡорттарҙы, ҡанға мансып,
Каруанһарай ҡорғандарын.
Ҡылғандарҙың ҡылдарында —
Бөйөк бер көй, бөйөк бер көй —
Ун етенсе йылда тыуған
Бөйөк бер көн, бөйөк бер көн,



Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә инде бында бер аҙ
Йырҙар яҙып ҡалаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Киң далала ике атлы,
Аллы-артлы, аллы-артлы,
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Елә-саба һаман-һаман.
Офоҡтарҙа дала ята,
Төндәр үтә, таңдар ата,
Таң яҡтыһы менән бергә
Өр-яңы көн тыуа ергә.
Килер көнгә, килер көнгә
Ике һыбай саба-елә,
Береһе уның үткәндәрҙән
Аманаттар алып килә,
Икенсеһе хәҙергенең
Фармандарын тотоп елә,
Ҡулдарында ялҡын-уттар,
Ялҡын-уттар янып килә.

Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә шунда, илһам сәсеп,
Йырҙар йыйып алаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Ғүмеремдең бер мәлендә
Күрҙем әле Ырымбурҙы,
Ерҙә, һыуҙа, һауаларҙа
Йәйрәп ятҡан моңло йырҙы.

## ЙӘШӘҮҘЕҢ МӘҢГЕЛЕК ЮЛДАРЫ

Икһеҙ ҙә, сикһеҙ ҙә диңгеҙҙә
Ал елкән каруандар теҙелгән...

Йәшәүҙең мәңгелек юлында,
Айҡалып-сайҡалып тулҡында,
Ғүмерҙәр үтәләр, ғүмерҙәр.

Минең дә дауылда, елдәрҙә
Ал ебәк елкәнем елберҙәй.
Яҡынмы барыр юл, алыҫмы,
Әллә ул тик бер моң, һағышмы,
Диңгеҙҙә елкенгән елдәрҙәй.

Шатлыҡтар, хаҡлыҡтар яуларға
Каруандар теҙелгән, каруандар...
Елкенә елкәнем минең дә
Каруандар сафында диңгеҙҙә,
Йыр булып алҡынған юлдарҙа.

Киләләр ғүмерҙәр, китәләр,
Күктәрҙе күкрәтеп үтәләр,
Йәшәүҙе яратып, өҙөлөп,
Ал елкән каруандай теҙелеп,
Мәңгелек нур-йомғаҡ һүтәләр.

## ТЕЛДӘР

Телдәр ерҙә төрлә булһалар ҙа,
Хаҡлыҡ теле бары бер генә;
Минең халҡым мәңге һөйләй белер
Һөйөү һәм дә нәфрәт телендә.

## ТИГЕҘЛЕКТӘР

Тигеҙлектәр, тигеҙләмәләр,
Тигеҙ көстәр, тигеҙ нәмәләр;
Ерҙе тотҡан тигеҙ нисбәттәр,
Нигеҙ булған тигеҙ хикмәттәр...



Кешелектең ҡараштары
Шул нигеҙгә табына,
Тигеҙһеҙлек бөтһөн өсөн
Революциялар ҡабына.

## АҠ ҠАРҘАН, АҠ МОНДАРҘАН

Яңы йылдың яңы көнө бөгөн,
Яңы көнө, яңы төҫтәре;
Яңы тыуған бала һымаҡ күреп,
Ҡаршы алам уны күтәреп.

Ҡаршы алам йылдың сабый сағын,
Аҡ биләүҙә ятҡан миҙгелен;
Был минуттар, был сәғәттәр ергә
Алып килһен бары изгелек.

Алып килһен, кешеләрем, һеҙгә
Бәхеттәрҙең ташып торғанын,
Күңелдәргә талмаҫ ҡанат булһын
Яңы йылдың яңы йырҙары.

Өр-яңы йыл тыуа, өр-яңы йыл
Ап-аҡ ҡарҙан, ап-аҡ мондарҙан,
Елеп бара ваҡыт толпарҙары
Аҡ мамыҡтай ап-аҡ юлдарҙан.

Аҡ мамыҡтай ап-аҡ, ай, юлдарҙа —
Сыңғыр-сыңғыр толпар сабышы,
Яңы бер йыл килә, яңы бер йыл,
Аҡ толпарҙар менән ярышып.

Аҡ толпарҙар елер, ай, был юлдар
Ерҙән алып күккә олғашҡан;
Яңы тыуған йылдың яңы көнө
Ҡош юлдары буйлап юл башлар.

Тик бер минут тороп ҡара.
Һырғалаҡта алыш бара,
Һырғалаҡта ярыш бара,
Берәү үргә менеп бара,
Берәү, ана, елбер-елбер,
Түбән табан елеп бара.

Эй ярыштың ҡыҙған сағы,
Аҡ ҡарҙарҙың туҙған сағы,
Бала саҡтың ҡар тауҙарын
Яулай-яулай уҙған сағы!

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Берәү үргә менеп бара,
Ҡамыр батыр һымаҡ ҡына,
Яйлап ҡына, майлап ҡына,
Бик күптәрҙе еңеп бара,
Элеп алып һелкеп һала;
Әммә еңеп бөткәс кенә,
Тауға менеп еткәс кенә,
Кемдер уны төртә уңдан,
Кемдер уны төртә һулдан;
Берәү үрләй алғы яҡтан,
Берәү үрләй артҡы яҡтан,
Уңдағы ла һөжүм итә,
Һулдағы ла һөжүм итә.
— Тау — минеке! — ти алдағы,
— Тау — минеке! — ти арттағы,
Арттағылар, алға сығып,
Арымайса, талмайынса,
Үрмәләйҙәр тауға тағы.

Аллы-артлы, аллы-артлы
Еңеү яулай малай заты,
Минут һайын тау башында
Ҡалҡып сыға яңы батыр.



Алмаш-тилмәш, алмаш-тилмәш,
Бер сәғәттә алты батыр
Алмашына унар тапҡыр.
(Алты түгел, кәрәк икән
Булһын бында алтмыш малай,
Алтмышы ла аллы-артлы
Тауға менеп баҫыр шулай,
Тауҙы яулап төшөр шулай.)

Алты малай, алты шалай —
Беҙҙең ауыл урамында,
Алыш бара, биреш бара
Ҡыштың ҡарлы буранында.

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Һырғалаҡта ярыш бара,
Зыҡ ҡубышып, йән-фарманға
Уйнай бында алты бала;
Еңеп сыҡты алтыһы ла,
Еңелеүсе юҡ арала.
Ғәжәп тә ул, мәҙәк тә ул,
Бына шундай малин-ҡала!

## ЫРЫМБУРЫМ — МОҢЛО ЙЫРЫМ

Ғүмеремдең бер мәлендә
Килдем бына Ырымбурға,
Ырымбурға, боронғо бер
Йәйрәп ятҡан моңло йырға.
  Эй Ырымбур далаһы,
  Далаһында — ҡалаһы,
  Әллә тағы берәй көнгә
  Бында тороп ҡалаһы,
  Эй Ырымбур далаһы...
Ырымбурҙа, моңло йырҙа
Заманалар тоташҡанмы,

Замананың заманаһы —
Беҙҙең дәүер тоташ данмы.
Данмы, ана, алтын дала,
Икһеҙ-сикһеҙ иген ҡыры,
Данмы дала ҡосағында
Яңғыраған иген йыры.
Данмы, данмы йәшел туғай,
Бейектәге ҡоштар юлы,
Данмы хеҙмәт фронтында
Замандаштың алтын ҡулы.
Дан түгелме далаларҙың
Ауылдары, ҡалалары,
Ауылдарҙың, ҡалаларҙың
Көләс йөҙлө балалары.

Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Иркен икән, күркәм икән
Далаларҙың һауаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Ырымбурым, моңло йырым,
Тәрәндәме тамырҙарың,
Үттеләрме замандарҙың
Елдәре лә дауылдары.
Һөйләйҙәрме, көйләйҙәрме
Ап-аҡ сәсле ҡылғандарың
Буғас менән Салауаттың
Бергә-бергә булғандарын;
Яландарҙа Пушкин күргән
Ырымбурҙың бурандарын;
Башҡорттарҙы, ҡанға мансып,
Каруанһарай ҡорғандарын.
Ҡылғандарҙың ҡылдарында —
Бөйөк бер көй, бөйөк бер көй —
Ун етенсе йылда тыуған
Бөйөк бер көн, бөйөк бер көн,



Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә инде бында бер аҙ
Йырҙар яҙып ҡалаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Киң далала ике атлы,
Аллы-артлы, аллы-артлы,
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Елә-саба һаман-һаман.
Офоҡтарҙа дала ята,
Төндәр үтә, таңдар ата,
Таң яҡтыһы менән бергә
Өр-яңы көн тыуа ергә.
Килер көнгә, килер көнгә
Ике һыбай саба-елә,
Береһе уның үткәндәрҙән
Аманаттар алып килә,
Икенсеһе хәҙергенең
Фармандарын тотоп елә,
Ҡулдарында ялҡын-уттар,
Ялҡын-уттар янып килә.

Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә шунда, илһам сәсеп,
Йырҙар йыйып алаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Ғүмеремдең бер мәлендә
Күрҙем әле Ырымбурҙы,
Ерҙә, һыуҙа, һауаларҙа
Йәйрәп ятҡан моңло йырҙы.

## ЙӘШӘҮҘЕҢ МӘҢГЕЛЕК ЮЛДАРЫ

Икһеҙ ҙә, сикһеҙ ҙә диңгеҙҙә
Ал елкән каруандар теҙелгән...

## САНА ШЫУА БАЛА-САҒА

Ҡыҙылтауҙан, ҡыҙып-ҡыҙып,
Сана шыуа бала-саға,
Арттарында ҡар бураны,
Ҡойон булып, уйнап ҡала.

Етеҙ тайға менгәнме ни,
Елбер-елбер елә улар,
Кескәй генә саналарҙа
Тау битләүен телә улар.

Йырып барып ҡалын ҡарҙы,
Тәкмәс атып китә улар,
Ярылмаймы тауың шунда,
Донъяларын тетә улар.

Бәләкәйҙәр, һеҙҙең дә бит
Үҙ юлығыҙ бар был ерҙә,
Тауҙан-тауға, ярҙан-ярға
Ҡала һеҙҙән күпме эҙҙәр...

Ап-аҡ ҡарҙар, аҡ йондоҙҙар —
Юлығыҙҙа — шығыр-шығыр,
Эй бала саҡ, һин бит үҙең
Иң яҡты йыр, иң саф шиғыр.

## ҺАҠТА ТОРА ИЛДЕҢ УЛДАРЫ

Тыуған илем,
мәңге изге һинең
Һәр аҙым ер,
һәр ус тупрағың,
Изге
күгең,
икһеҙ-сикһеҙлегең,



Изге һинең
тере һыуҙарың.
Ерҙән —
ҡеүәт,
һыуҙан —
ҡөҙрәт алып,
Анттар биреп
халыҡ алдында,
Ыласындай
ҡыйғыр
егеттәрең
Сафта тора
һинең
һағыңда.

Һаҡта тора
батыр ил улдары,
Тыныс булһын
ауыл, ҡалалар,
Ал таңдарҙы
һөйөп уянһындар
Тауҙар,
таштар,
һыуҙар,
һауалар.

Тыуған илем,
һинең киңлектәрең
Булһын һәр саҡ
бәхет төйәге,
Бар халыҡтар
тик шатлыҡтар менән
Ҡаршы алһын
килер көндәрҙе.

Килер көндәр,
тыуыр таңдар өсөн

# ӨРШӘК АША

Өршәк аша — канатлы юл,
Өршәк аша — ҡанатлы юл.
Ярҙан-ярға — ҡорос ҡанат,
Ярҙан-ярға — ҡорос канат.
Аҙарынған, ташҡан һыуҙар,
Ярҙарынан ашҡан һыуҙар,
Ә мин бына канат-юлдан
Арғы яҡҡа барам йылдам,
Арғы яҡҡа бирге яҡтан
Үткәрелгән канат юлдан.
Йылға аша, йылдар аша
Бала саҡҡа уй олғаша...

О ул заман... Юлдар яман.
Ете саҡрым — күрше ауыл.
Хәҙер инде аңлайым мин:
Булған икән, булған ауыр.

РӘШИТ ШӘКУР

# Тауҙарым, Далаларым

*Шиғырҙар, хикәйәттәр*

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1982

ББК 84 (Башҡ)
Ш 91

Шәкүр Р.

Ш 91 Тауҙарым, далаларым. Шиғырҙар, хикәйәттәр. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте. 1982.— 64 бит.

Был йыйынтыҡҡа Рәшит Шәкүрҙең тыуған республикабыҙ, еребеҙ, илебеҙ күрке, тормош, йәшәү шатлығы хаҡында шиғырҙары, фиҙакәрлекте сағылдырған хикәйәттәре индерелде.

Ш $\frac{70803-482}{М 121(03)-82}$ 108—82 ББҠ 84 (Башҡ)

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1982 й.



## Шиғырҙар

### ЙОНДОҘҘАР

И звезда с звездою говорит...

*М. Ю. Лермонтов*

Аяҙ күктә йым-йым итә
Күпме йондоҙҙар;
Илем, һинең күгеңдә лә
Мең-мең йондоҙ бар.

Йондоҙ менән йондоҙ, ана,
Төнөн серләшә,
Телдәр менән телдәр аша
Илдәр берләшә.

Үҙ телемдә, үҙ еремдә
Йырлайым бөгөн,
Бөтә телдәр берғә-берғә
Ҡабатлай: Ленин!

## ҠОШСОҒОМ

Ҡошсоғом минең, ҡошсоғом,
Ҡайҙарға юл тоттоң?
Киңлеккә, киңлеккә.
Йырҙарым минең, йырҙарым,
Ҡайҙарға йыр осто?
Бейеккә, бейеккә.

Иркендә, зәңгәр күк ҡуйынында
Ҡоштарҙың ояһы,
Ҡоштарҙың ояһы;
Бейектә, нәҡ ҡояш тиңендә,
Сафлыҡтың донъяһы,
Сафлыҡтың донъяһы.

Шуға ла иреклe ҡошсоҡтар
Киңлеккә артыла,
Киңлеккә артыла;
Йөрәктән сыҡҡан йыр, тынмайса,
Ҡошсоҡтай талпына,
Ҡошсоҡтай талпына.

Мин һүнмәҫ бер ҡояш йөрөтәм
Йөрәктең түрендә,
Йөрәктең түрендә,
Йырыма ҡанаттар ҡөя ул
Күңелем күгендә,
Күңелем күгендә.

Ҡояшым — ул минең ҙур илем,
Ҡошсоғом — йырсығым,
Ҡошсоғом — йырсығым;
Ос һин, ос алыҫҡа, һин дә бит
Шул ҡояш ярсығы,
Шул ҡояш ярсығы!



## ТЫУҒАН ЙОРТОМ — УРАЛЫМ

Оло йортом — Уралым,
Ырыҫ-ҡотом — Уралым,
Мәңге тере ораным,
Мәңге торор ораным,
Һиндә минең йөрәгем,
Һиндә минең терәгем.

Һауаларға артылып,
Осаҡ ҡоштай талпынып,
Яландарын, ҡырҙарын,
Йәншишмәләй һыуҙарын
Бар йыһанға балҡытып,
Буйын-һынын ҡалҡытып,
Алмас йөҙөк ҡашындай,
Аҫыл аҡыҡ ташындай,
Нурҙа уйнап ятҡан ер,
Моңдар йыйнап ятҡан ер.

Ай Уралым, таш йортом,
Башҡортомдоң баш йорто,
Ете ырыуға ҡор булған,
Бергә туплап ҡурғыған,
Арыҫлан йөрәк улдарын,
Һөләктәй һылыу ҡыҙҙарын
Үҙ иркендә үҫтереп,
Үҫтереп буй еткереп,
Минең данлы халҡыма,
Илдең изге антына
Бишек булған Уралым,
Ышыҡ ҡорған Уралым;
Ябырылып яу килһә,
Ят яҡтарҙан дау килһә,
Ҡаршы торған Уралым,
Оран һалған Уралым.

## ҠОШСОҒОМ

Ҡошсоғом минең, ҡошсоғом,
Ҡайҙарға юл тоттоң?
Киңлеккә, киңлеккә.
Йырҙарым минең, йырҙарым,
Ҡайҙарға йыр осто?
Бейеккә, бейеккә.

Иркендә, зәңгәр күк ҡуйынында
Ҡоштарҙың ояһы,
Ҡоштарҙың ояһы;
Бейектә, нәҡ ҡояш тиңендә,
Сафлыҡтың донъяһы,
Сафлыҡтың донъяһы.

Шуға ла ирекле ҡошсоҡтар
Киңлеккә артыла,
Киңлеккә артыла;
Йөрәктән сыҡҡан йыр, тынмайса,
Ҡошсоҡтай талпына,
Ҡошсоҡтай талпына.

Мин һүнмәҫ бер ҡояш йөрөтәм
Йөрәктең түрендә,
Йөрәктең түрендә,
Йырыма ҡанаттар ҡөя ул
Күңелем күгендә,
Күңелем күгендә.

Ҡояшым — ул минең ҙур илем,
Ҡошсоғом — йырсығым,
Ҡошсоғом — йырсығым;
Ос һин, ос алыҫҡа, һин дә бит
Шул ҡояш ярсығы,
Шул ҡояш ярсығы!



## ТЫУҒАН ЙОРТОМ — УРАЛЫМ

Оло йортом — Уралым,
Ырыҫ-ҡотом — Уралым,
Мәңге тере ораным,
Мәңге торор ораным,
Һиндә минең йөрәгем,
Һиндә минең терәгем.

Һауаларға артылып,
Осар ҡоштай талпынып,
Яландарын, ҡырҙарын,
Йәншишмәләй һыуҙарын
Бар йыһанға балҡытып,
Буйын-һынын ҡалҡытып,
Алмас йөҙөк ҡашындай,
Аҫыл аҡыҡ ташындай,
Нурҙа уйнап ятҡан ер,
Моңдар йыйнап ятҡан ер.

Ай Уралым, таш йортом,
Башҡортомдоң баш йорто,
Ете ырыуға ҡор булған,
Бергә туплап ҡурғыған,
Арыҫлан йөрәк улдарын,
Һөләктәй һылыу ҡыҙҙарын
Үҙ иркендә үҫтереп,
Үҫтереп буй еткереп,
Минең данлы халҡыма,
Илдең изге антына
Бишек булған Уралым,
Ышыҡ корған Уралым;
Ябырылып яу килһә,
Ят яҡтарҙан дау килһә,
Ҡаршы торған Уралым,
Оран һалған Уралым.

Аҡ намыҫын халҡымдың,
Аҡһаҡалдар аҡылын,
Сал тарихтең тауышын,
Шатлыҡтарын, ҡайғыһын,
Алдар һымаҡ ирҙәрҙең,
Салауаттың, Кинйәнең
Утлы әҙен онотмаҫ,
Утлы һүҙен онотмаҫ,
Шоңҡар йәнле Уралым,
Толпар һынлы Уралым.

Ун етенең таңында,
Тиңлек тыуған сағында
Хаҡлыҡ килгәс халыҡҡа,
Шатлыҡ килгәс халыҡҡа,
Әкиәт, йомаҡ ҡартындай,
Мәңге тере батырҙай,
Байлыҡтарын, мөлкәтен,
Алтын-көмөш ҡиммәтен,
Нефть, яҡут, тимерен,
Ҡатлам-ҡатлам күмерен,
Һыуҙарының ҡеүәтен,
Ут яндырыр ҡөҙрәтен,
Ишелеп үҫер игенден
Муллыҡ алып килерен,
Яландарҙың, тауҙарҙың
Бейеклеген, киңлеген
Үҙ йәнендәй күргән ер,
Үҙ йәненә үргән ер.

Минең туған халҡымды,
Минең тоғро антымды,
Башҡорт менән урыҫты,
Дуҫлыҡ тигән ырыҫты
Һаҡлап торор Уралым,
Яҡлап торор Уралым;



Төрлө-төрлө милләтте
Иңдәрендә тирбәтеп,
Батырлыҡҡа дан йырлап,
Татыулыҡҡа дан йырлап,
Балҡып торор Уралым,
Ҡалҡып торор Уралым.

Шоңҡар йәнле Уралым,
Толпар һынлы Уралым,
Мәңге тере ораным,
Мәңге торор ораным,
Таш тамырым, таш йортом,
Башҡортомдоң баш йорто,
Һиндә минең терәгем,
Һиндә минең йөрәгем.

## ҠАНАТЫМ

Ни ҡанатлы ерҙә?
Аттың толпары.
Кем ҡанатлы илдә?
Ирҙең солтаны.
Ҡуш ҡанатын елпеп,
Оса сал бөркөт;
Бөркөт — тауҙа, егет —
Яуҙа ил күрке.
Шатлыҡ тубымы ни
Һабан турғайы,
Йырҙарынан ҡоя
Ҡояш нурҙарын.
Ҡанат аҫты ҡаурый
Ҡара ҡарлуғас,
Төйәгенә ҡайта,
Күкрәп яҙ тыуғас.
Һандуғасҡай һайрай
Һары таллыҡта,

Ҡанаттары уның —
Йырсы халыҡта.
Ниндәй ҡанат икән
Минең йөрәктә,
Ниндәй ғәйрәт таша
Ҡеүәт — беләктә?
Бөркөт ҡанаты ул
Туған халҡымдың,
Шул ҡанаттар менән
Үргә ҡалҡындым.

## ИЛ ЙӘШЛЕГЕ — КОМСОМОЛ

Ун һигеҙҙең шанлы октябрендә
Ил ишетте уның ауазын,
Ерҙә тыуҙы шул саҡ йәш баһадир —
Коммунистик йәштәр союзы.
Октябрҙең еңеүҙәрен яҡлап,
Ут эсендә тыуҙы был батыр;
Коммунистәр менән бер сафтарға,
Ҡулға ҡорал тотоп ул баҫты.
Ленин исеме менән йөрәгендә
Халҡым социализм төҙөнө.
Илгә дошман килгәс,
                    беҙ яуланыҡ
Ленин исеме менән еңеүҙе.
Сиҙәмдәге тәүге киң бураҙна
Байкал — Амур тигән ҡорос юл,—
Был да һинең данлы биографияң,
Илдең йәш батыры — комсомол.
Ун һигеҙҙә тыуған был батырға
Ун һигеҙ йәш һаман, ун һигеҙ.
Алмашсылар!
Хеҙмәт һәм көрәш эстафетаһын
Шул батырҙан ҡабул итегеҙ!



## «ҺАНДАР» ТИГӘН ЦИКЛДАН

### Бер

Бер ул — берҙән-берең, күҙ нурҙарың һинең,
Иң ҡәҙерле, иң мөҡәддәс Тыуған илең;
Берҙән-берең — йырлы, моңло тыуған ерең,
Сәңгелдәктән тыңлап үҫкән туған телең.

Бер ул — һинең, илде һөйөп, янып-көйөп,
Көнөн-төнөн тибеп торған йөрәк хисең;
Берҙән-бере һәм күҙ нуры Тыуған илдең —
Һин ул, кешем,
                    һинең изге эшең.

### Ике

Һауаларҙа ҡанат йәйгән ҡош булыр ул,
Ҡошҡайҙарҙың ҡанаттары ҡуш булыр ул;
Ҡуш йөрәкле шоңҡарҙары булыр илдең,
Ҡуш ҡанатлы толпарҙары булыр илдең.

Ҡуш йөрәкле, ҡуш ҡанатлы халҡым минең —
Алтын-көмөш хәзинаһы алтын илдең;
Алтын илем, алтын илдә алтын халҡым,
Һеҙҙе яҡлау, һеҙҙе һаҡлау — минең антым.

## КЕШЕ БӨЙӨК

Кеше бөйөк, күккә ашҡан ҡая кеүек,
Кеше бөйөк, бейектәге йондоҙ кеүек;
Кеше бөйөк, ҡояш кеүек ҡарашы,
Кеше үҙе — уй һәм фекер ҡояшы.

* * *

Миллионлы халҡым, миллионлы,
Миллион аҡыл, миллион моң,
Мин донъяға уҡталғанмын
Уйы менән миллиондың.

## БЕҘ

Беҙ — дәүерҙең тоғро балалары,
Маҡсат — изге, күңел — ҡанатлы,
Үткәндәрҙе йыйып йөрәктәргә,
Төбәгәнбеҙ алға ҡараштгы.

## ЕРЕМ, ИЛЕМ, ТЕЛЕМ

Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә,
Минең йәшәү тамырҙарым —
Башҡорт ерендә.
Өмөттәрем, хыялдарым,
Йөрәк тибешем —



Киң Уралым, йырлап аҡҡан
Һинең инешең;
Алыҫ-алыҫ яңғыраған
Моңло йырҙарым —
Мең инеште бергә йыйған
Көмөш һыуҙарың.
Яуҙар сапҡан улдарыңдың
Көсө — беләктә,
Ҡайғылары, шатлыҡтары —
Минең йөрәктә.
Күпме ҡайғы, күпме шатлыҡ
Күрһә тыуған ер,
Ер күргәнде, ил күргәнде
Һаҡлай туған тел.
Миллион кеше күкрәгендә
Күкрәй ул бөгөн,
Йөҙ утыҙҙың [1] араһында
Тиңдәрҙән-тиңем.
Туған телем, һин халҡымдың
Былбыл тауышы,
Быуаттарҙан-быуаттарға
Ҡанат ҡағышы.
Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә,
Минең йәшәү тамырҙарым —
Башҡорт ерендә.

## БӨЙӨК ҺЫБАЙ

Батыр һыбай — Өфө тауҙарында,
Ҡая ташлы Иҙел ярында,
Иңдәрендә уның — күк көмбәҙе,
Дала йәйрәп ята алдында.

---

[1] Хәҙерге ваҡытта Советтәр Союзында йөҙ утыҙ тел иҫәпләнә.

Салауатың, халҡым, Салауатың,
Быуат ҡатламдарын аҡтарып,
Күтәрелгән Урал күкрәгенә,
Тоғро толпарына атланып.
Ат өҫтөндә батыр көнөн-төнөн,
Әйтерһең дә, посҡа баҫҡан ул,
Изге көрәш яуҙарында янып,
Мәңгелеккә шулай ашҡан ул.
Азатлыҡтың яҡты хәбәрсеһе,
Эй һин, Урал улы Салауат,
Йөрәктәрҙә йәшен йәшнәүҙәре —
Ул һинәнме ҡалған аманат!
Башҡортомдоң революцияға
Сарсап барып ингән сағында,
Еңеү маршы булып яңғыраған
Һин инеңме илдең һағында!
Кешелектең үткән юлдарында
Һәр бер заман — яңы бейеклек,
Бөтә дәүер, бөтә халыҡтарҙа
Салауаттар — мәңге бөйөклөк.
Һәйкәл тора Урал күкрәгендә,
Ҡая ташлы Иҙел ярында,
Салауатың, утлы аманатың,
Тыуған тупраҡ, һинең һағыңда!
Ҡаяларҙан бейек күтәрелгән
Теп-тере ат, тере аҙамат;
Мәңгелеккә илдән һөргәйнеләр,
Мәңгелеккә ҡайтты Салауат!

* * *

Һинең менән, ерем, тын алышым,
Уйҙарымдың талғын ағышы;
Таң һарыһы һымаҡ тын һағышым,
Һәр тауышың — ҡанат ҡағышым.



Һин нур яҡтың минең күҙҙәремә,
Йыр уяттың минең әҙҙәремдә;
Шатлыҡтарҙың шиңмәҫ шишмәләре
Йән ереккән тыуған ерҙә генә.

## ЙӨРӘГЕМДӘ — ҠОЯШ

Баш осомда — ҡояш яҡтыһы,
Уйҙарымда — ҡояш саҡҡыһы,
Йөрәгемдә ҡояш йылмая,
Күҙҙәремдә ҡояш нурлана.

Кешеләрҙе ҡояш уята,
Хәрәкәткә ҡояш ҡуҙғата,
Ергә таңды ҡояш килтерә,
Таң яҡтыһын ҡояш еткерә.

Көрәшсене ҡояш етәкләй,
Ҡараңғыны ҡояш тетмәкләй,
Бейеклеккә ҡояш юл болғай,
Яманлыҡҡа ҡояш юл ҡуймай.

Баш осомда — ҡояш яҡтыһы,
Уйҙарымда — ҡояш саҡҡыһы,
Йөрәгемдә ҡояш йылмая,
Күҙҙәремдә ҡояш нурлана.

## КӨМӨШ ТАУЫШ, ЕҘ ҠЫҢҒЫРАУ

Күңелемә бигерәк яҡын
Ҡыңғырау ҡағыштары,
Көмөш тауыш, еҙ ҡыңғырау —
Ерҙең шат тауыштары.
Сыңғыр-сыңғыр был сыңдарҙа
Бар шишмәнең йырҙары,

Бар ҡояшлы иртәләрҙең
Алтын-көмөш нурҙары.
Ҡыңғырауҙар ҡаҡҡан саҡта
Ер ҙә, күк тә һөйөнә,
Мәктәп беҙҙе ҡаршы ала
Ҡыңғырауҙар көйөнә.
Тыуған илкәй, иркен еркәй,
Яҡты һинең көндәрең,
Еҙ ҡыңғырау тауышында —
Һинең наҙлы өндәрең.
Берҙәм, тығыҙ сафтарҙа беҙ
Үҫеп етербеҙ әле,
Имен булһын Тыуған илдең
Ҡояшлы иртәләре!

## ШУНДАЙ ЙЫР ЙЫРЛАРМЫН

Шундай бер йыр йырлармын —
Моңһоҙҙоң йәне тетрәр,
Ете ҡат күк өҫтөндә
Минең тауышым күкрәр.

Шундай бер йыр йырлармын —
Таштар ҙа сәскә атыр,
Шиғриәт тауҙарында
Юйылмаҫ эҙҙәр ятыр.

Шундай бер йыр йырлармын —
Боҙҙарҙы иретерлек,
Һатлыҡтың йәнен алып,
Ебекте ир итерлек.

Йырлармын шундай бер йыр, —
Аһ, тылсым ҡанаттары
Мәңгегә әсир итер
Одиссей караптарын.



## ҺАУАЛАРҘА — ЙОНДОҘ

Ҡаплап ерҙе, ҡаплап күкте
Килә төн;
Ай һәм йондоҙ сәфәр сыға
Аяҙ төндәр, аман төндәр
Еткәстен.

Айлы төндә уттар яна
Алтындай,
Күк ҡуйынында, сабый һымаҡ,
Йоҡлай Ерем, эшсән Ерем...
Һаҡлап уның наҙлы мәлен,
Балҡый ай,
Яҡты ай.

Әлдә әле күк йөҙөндә
Айҙар бар,
Бар ғаләмдең мең-мең күҙе —
Йондоҙҙар.

Күктең күрке — балҡып янған
Йондоҙҙарҙа,
Көләс йөҙлә түп-түңәрәк
Тулы айҙа;
Ерҙең күрке — йондоҙға тиң
Улдар барҙа,
Бер бите ай, бер бите көн
Ҡыҙҙар барҙа.

## КҮКРӘГЕМДӘ БЕР МОҢ ТЫУҘЫ

Ерҙә яңы бер көн тыуған мәлдә
(Эй һеҙ, көндәр, донъя яҡтыһы!),
Мең-мең уйҙы бер туплауға йыйып,
Һайлап алдым иң-иң татлыһын.

Күкрәгемдә шул саҡ бер моң тыуҙы,
Күкрәп-тетрәп, моңдоң ҡөҙрәте
Урал һырттарына алып китте,
Хыял ҡанатында тирбәтеп.
Тауҙарымда, күрәм, ҡояш балҡый,
Яҡтылыҡҡа ашҡан Уралым;
Иңләп-буйлап, бында бәхет йөрөй,
Шатлыҡ әйҙәй илдең улдарын.
Күк толпарҙар, таңға ҡанат йәйеп,
Әкиәттән күскән ысынға,
Буранбайҙың көйөн көйләй берәү,
Йәнен биреп ошо тылсымға.
Ҡарт тауҙарым Ерҙең күкрәгендә
Ҡалҡан һымаҡ ята ҡалҡынып,
Сал бөркөттәр саңҡып оса бында,
Аҡ һыуҙарым аға алҡынып.
Уралҡайым, ерҙә, күктә әллә
Сәңгелдәге һинме моңдарҙың...
Шул моңдарға тыңлап көйләйем мин
Күңелемдең шигри ҡылдарын.

## ҠАРАТАУҘА ЙӘЙГЕ ТАҢ

Ҡаратауҙа ҡараңғы төн,
Ҡараңғы төн, ҡара урман;
Тау битенә ҡара төндә
Кемдәр усаҡ яғып ҡуйған?

Кемдәр унда — төн йөҙөндә
Янған утҡа табынғандар,
Тауға менеп, ташҡа баҫып,
Кемдәр йондоҙ ҡабыҙғандар!

Кемдәр улар, күтәрелеп
Ерҙән бер аҙ бейегерәк,



Таңды ҡаршы алыусылар
Бүтәндәрҙән элегерәк!

Күктә, ана, күптән инде
Күренмәйҙәр аҡ йондоҙҙар,
Ҡара төндә йондоҙ һымаҡ
Усаҡтағы утлы ҡуҙҙар.

Ҡараңғылыҡ шыйыҡырaҡ
Була бара һаман-һаман,
Беҙҙең был ер ашыға бит,
Ашыға бит таңға табан.

Яҡты тыуа, ҡыуа-ҡыуа
Ҡаратауҙан ҡара төҫтө;
Уяларҙы һөйөп, наҙлап,
Аҡ биләүҙәй томан төштө.

Ҡаратауҙа ҡара урман —
Ул да таңды көткән, көткән,
Алдан алһыу уҡтар сөйөп,
Ҡояш таңды хәбәр иткән.

Көтөп алған алһыу суҡтар —
Бына улар устарымда,
Төнө буйы усаҡ яғып,
Таң аттырған дуҫтарымда.

Эй таң ата! Алһыу-алһыу
Таңдың тыуған минуттары.
Ҡараштарҙа ҡалһын-ҡалһын
Яҙмыштарҙың был уттары.

2 Заказ 304

## МАНДОЛИНА

Мандолина, мандолина,
Мандолина ҡылдарында,
Әйтерһең дә, ярҙан-ярға,
Яҙғы һыуҙар ярһып аға.
Яҙғы һыуҙар, яҙғы уйҙар...
Аҡтарылып аға боҙҙар,
Ярһып-ярһып аға йылға,
Яҙғы һыуҙай, яҡты донъя.
Ана, берәү баҫҡан боҙға,
Боҙ өҫтөндә — тере ҡуҙҙар...
Асманға ул асып йөҙөн,
Һәр тарафҡа һөйләй һүҙен.
Айҙан алып, ап-аҡ нурҙар
Һибеп бара яҡ-яғына,
Ҡуптарылып килгән халыҡ
Ташҡын һыуҙың ярҙарына.
Бына бер мәл йырсы егет,
Юғарыға үрелә бирел,
Бер шәлкем нур ҡосоп ала,
Күкрәгенә ҡыҫып ала;
Нурҙарҙы ҡыл итеп сиртә,
Һыуҙар аға, боҙҙар китә,
Боҙ өҫтөндә, ялҡын булып,
Алтын бер йыр балҡып китә.
Йыр балҡышы, йыр алҡышы
Баҙлап бара ташҡындарҙа,
Йырға йәнен фиҙа ҡылып,
Тора халыҡ ташҡын ярҙа.
Ярҙан-ярға, ярҙан-ярға
Аға һыуҙар, аға боҙҙар,
Күкрәктәрҙә күк күкрәтеп,
Аға уйҙар, аға уйҙар.
Аҡты һыуҙар, китте боҙҙар,
Ярҙарына ҡайтты йылға;





Ташҡындарға китте егет...
Нурҙа уйнап ҡалды йырҙар.
Зың-зың иткән, ай, зың иткән
Мандолина ҡылдарында.
Ҡалды йырҙар, ҡалды моңдар
Ер һәм ҡояш юлдарында.

## ТӨНГӨ КҮГЕМ

Төнгө күгем хәтерләтә миңә
Әкиәттәге серле донъяны:
Ҡап уртала — түп-түңәрәк йөҙлө
Һылыу айҙың нурға тулғаны;
Йыһан төпкөлөнән йондоҙҙарҙың
Сыңғыр-сыңғыр сыңы ағыла;
Ҡыҙыҡмаймы икән башҡорт ҡыҙы
Сулпы итеп йондоҙ тағырға!
Ялтлап тора күктә алтын сүмес,
Бер ситтәрәк ҡалған нишләптер;
Кемдәр генә уны ҡуйҙы икән
Ете йөйлө итеп эшләтеп?

## ТӘҮГЕ ҠАР

Леп-леп кенә тағы бына
Ҡырпаҡ ҡар ятты;
Тыуған ерем, йөҙөң һинең
Ниндәй ап-яҡты!

Тынды тамам талғын аҡҡан
Йылға-һыуҙарым,
Ап-аҡ юрған ябындылар
Ялан-ҡырҙарым.

Шымып ҡалды Уралымда
Ҡарағай, шыршы...
Төрәнеп мамыҡ аҡ ҡарға,
Көтәләр ҡышты.

## ШАТЛЫҠТАР

Шатлыҡтар — шат ҡоштар,
Һыуҙан аҡ шатлыҡтар,
Һөттән пак шатлыҡтар,
Аҡ толпар, аҡ шоңҡар,
Шатлыҡтар, шатлыҡтар.

Шатлыҡтар — шат ҡоштар,
Күкрәктә — алҡыштар,
Ут ҡоштай ут булып,
Толпарҙай ҡот булып,
Килегеҙ, шатлыҡтар,
Шатлыҡтар — шат ҡоштар.

## ВАҠЫТ

Ваҡыт ул — мәңгелек ел-дауыл,
Ер шарын, ғаләмде урар ул.

Ваҡыт ул — йәшәйеш һулышы,
Донъяның ғәжәйеп булмышы.

Ваҡыт ул — тынғыһыҙ, тыйғыһыҙ,
Йәне бар һис тынып торғоһоҙ.

Ваҡыт ул — үҙенсә бер ярыш,
Тауҙаймы әшең, йә бер ҡарыш.



Ваҡыт ул — серле бер йомғаҡтай,
Асыҡ та, йомоҡ та йомаҡтай.

Ваҡыт ул — туҡталмаҫ бер карап,
Елдерә гел алға ул ҡарап.

## БӨТӘ НӘМӘ АЛҒА ТӨБӘЛГӘН

Бөтә нәмә алға төбәлгән:
Олатайҙан ҡалған уҡ һәм йыр;
Һыу ҙа тауҙан алға тәгәрләй,
Алға илтә хатта урау юл.

Туймай донъя, туймай тиҙлеккә,
Тиҙме тиҙлек беҙҙең күҙлектән?
Ҡулдарымда — толпар теҙгене,
Уйҙарымда — йондоҙ тиҙлеге.

## АЛЬПИНИСТӘР ЙЫРЫ

Ҡояшта ҡыҙынып,
Һыуыҡта сынығып,
Ҡоростай
Нығытып
Ҡулдарҙы,
Үрләйбеҙ беҙ күккә,
Бейектән-бейеккә
Һалабыҙ
Иң текә
Юлдарҙы.
    Беҙ яҡын менәбеҙ
    Ҡояштың үҙенә,
    Ҡыйыулыҡ тамғаһы —
    Альпинист эҙендә.

Артылып тауҙарға,
Етһәк тә ҡайҙарға,
Илдең беҙ
Ҡарашын
Тоябыҙ;
Бик бейек ерҙәрҙә,
Дауылдан, елдәрҙән
Иң нығын
Дуҫлыҡтың
Ҡоябыҙ.
Беҙ яҡын менәбеҙ
Ҡояштың үҙенә,
Ҡыйыулыҡ саҡтыһы —
Альпинист эҙендә.

## ҺАУМЫҺЫҒЫҘ, ЯҘҘАР!

Һаумыһығыҙ, яҙҙар,
яҡты айҙар,
яҡты көндәр,
яҡты хыялдар!..
Һеҙ бит — күктән аҡҡош булып
теҙелешеп уҙып барған
ал яулыҡлы
аҡ һылыуҙар,
аҡ йондоҙҙар!

Эй һеҙ, яҙҙар,
яҙғы наҙҙар!
Ҡарағыҙсы,
беҙҙең күҙҙәр, беҙҙең йөҙҙәр
һеҙҙе һөйөп тәбрикләйҙәр,
хатта беҙҙең ҡырыҫ елдәр,
һеҙҙе күреп, шыбырҙайҙар
иркә һүҙҙәр.



Яҙғы айҙар,
яҙғы көндәр, яҙғы төндәр,
ашыҡмағыҙ әле улай;
ер-һыуҙарҙы урай-урай,
үткән саҡта Урал аша
ҡылһағыҙсы бер тамаша:
был тауҙарҙа, далаларҙа
ерҙән алып күккә ҡәҙәр
күтәрелгән бер бәһлеүән,
Башҡортостан — ул аҫыл йән.

Күкрәгендә был батырҙың
күкрәп торған кестәр ята,
янартауҙай һүнмәй торған
икһеҙ-сикһеҙ хистәр ята.
Ашыҡмағыҙ,
аҡкоштарым!
Талғын-талғын
елпеп ҡанат,
уҙығыҙ һеҙ Урал аша,
Уралтау ҙа, һеҙҙе күреп,
ҡылһын әйҙә бер тамаша.

Аҡ ҡоштарым,
аҡ ҡыштарҙы
йәшел мәлгә тоташтырып,
яҙ килтергән, наҙ килтергән
пак ҡоштарым —
теҙелешеп уҙып бара,
һауаларҙа был айҙарҙа
өр-яңы йыр һуҙылып бара.

Юҡ-юҡ,
берүк, һеҙгә, кешеләрем,
булмаһын ул аҡкош йыры,
булһын бары: «Яҙ!»,
«Яҙ!» — тиеп,

аҡ-аҡ ҡышты наҙлы яҙға
тоғаштырған
паклыҡ йыры,
күңелдәргә ҡанат ҡуйыр
шатлыҡ йыры,
шатлыҡ йыры.

## МИН ДАЛАЛА ТЫУҘЫМ

*Ауылдаштарыма*

Мин даланан килдем ҡалаға,
Ә йөрәгем йәшәй далала;
Сәңгелдәгем, моңом — сал дала,
Далаларҙа йәнем һаҡлана.

Ҡарт даламдың утлы ҡояшын,
Меңәр йыллыҡ дарья һағышын
Күкрәгемә һалып килтерҙем,
Күкрәүҙәрҙе алып, мин килдем.

Яланымдың йәйғор төҫтәрен,
Томраларын, әрем еҫтәрен
Алып килдем шаулы ҡалаға,
Ә табынам һаман далаға.

Дала ирке ингән уйыма,
Дала күрке һеңгән йырыма,
Мин далала тыуҙым, далала,
Дала рухы йәшәй ҡалала.



## ҠЫЛҒАНДАР

Ҡылғандар, ҡылғандар,
Далаға тулғандар,
Сәстәрен ҡояшҡа
Тарап та ҡуйғандар.

Ел үрә, ел һүтә
Толомон ҡылғандың,
Елкетә, елкетә
Яланда тыуған моң.

Сал сәстәр, сал төҫтәр —
Ерҙең саф һағышы,
Сәңгелдәк көйөндәй
Тыуған ер тауышы.

## МАЙ АЙЫ

Килеп етте, елеп етте
Ал байраҡлы май айы,
Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең
Шатлыҡтарға бай айы;
Эй май айы, май айы!

Шундай ихлас күктә ҡояш,
Йөҙө, гүйә, һары май,
Көн буйына ерҙе һөйөп,
Йылмая ул арымай;
Эй яҡты ай, яҡты май!

Майға ҡарап, айға ҡарап,
Кейенә ер йәшелдән,
Йәшел үлән өҫтәрендә
Иркәләнә йәш елдәр;
Эй йәшел ай, йәшел май!

Ошо айҙа туғайҙарҙа
Моң тибрәтә һандуғас,
Ниндәйен ҙур бәхет бит был,
Һандуғаслы яҙ тыуғас;
Эй наҙлы ай, наҙлы май!

Ең һыҙғанып, йөрөй был ай
Яландарҙа, ҡырҙарҙа,
Уңғанлығы менән оҡшаш
Беҙҙең эшсән ҡыҙҙарға;
Эй матур ай, матур май!

## УРАЛЫМДЫҢ АҒЫН ҺЫУҘАРЫ

### Йылғасығым

Шарлап аға ҡеҫкәй йылға,
Уйынсыҡтай,
Уйым-уйым шарламалар,
Тап орсоҡтай,
Зыр әйләнеп, бер туҡтауһыҙ
Уйнап тора,
Йылғасығым, йырсы ҡыҙҙай,
Йырлап тора.

Ҡарағыҙсы, зәңгәр күктә
Алтын ҡылдар
Һыу өҫтөнән ҡояшҡаса
Тартылғандар.
Дәртләнешеп уйнай елдәр —
Тилбер ҡулдар,
Һауаларым, ерем тулы
Моңдар, моңдар,
Уйнағас ни, ҡояш нурын
Кейгә һалып,
Ерҙә һыуҙар йырлап аға,
Аға ярһып.

## Уй

Уй һыуҙары аға уйһыуҙарҙан,
Уйылып ҡына ҡалған уй һымаҡ;
Булырмы ла ерҙә, ай, булырмы
Уйсан йылға тағы Уй һымаҡ.

Уйҙарыңды тартһа Уй буйҙары,
Урау-урау илде урарһың,
Уралҡайҙың уйҙар булып аҡҡан
Сал тарихен уйлап йырларһың.

## Дим

Йәйге көндә Дим өҫтөндә
Уйнай шат ҡояш;
Ниндәй рәхәт, ниндәй һәйбәт,
Ҡояш балҡығас.
Иркен туғайҙар,
Шундай киң һауа!
Күктең бар нуры
Еремә яуа.
Әллә инде ысын көмөш
Һыуы был Димдең,
Йыйғанмы ул йылылығын,
Наҙын илемдең.
Донъялар матур,
Күгем киң минең,
Мәңгелек йырға
Димем тиң минең.

## Өршәгем

Ялан ерҙе ярып ҡап уртаға,
Төньяғына уҡтай тартылып,



Өршәк-йылға аға талғын ғына,
Бәгеләргә хатта тартынып.

Толомдары һымаҡ һылыу ҡыҙҙың,
Талдар, туғайлыҡтар һуҙылған;
Ян-яғына, көмөш тәңкә булып,
Йоморо-йоморо күлдәр уйылған.

Йәйрәп ята йәшел диңгеҙ бында —
Икһеҙ-сикһеҙ ҡырҙар, баҫыуҙар,
Байкал-күлгә тиңдер тәрәнлектә
Күкте төшәп ятҡан ятыуҙар.

Эй Өршәгем минең, татыр һыуың
Татлы күрәм юкә балдан да;
Ҡан тамыры итеп, һинеме әллә
Йөрәгемә уйып һалғандар.

## Стәрле

Стәрлекәй, селтәрлекәй,
Селтер-селтер һыуҙары,
Гөлбаҡсалай балҡып тора
Стәрлеһыу буйҙары.

Стәрлекәй, селтәрлекәй,
Ярҙан-ярға баҫмаһы;
Йәшел ялан өҫтәрендә —
Ерҙең аҫыл таҫмаһы.

## Эҫемкәйем, Эҫемем

Уралымда бер йылға бар —
Эҫеме ул, Эҫемме?
Халҡым ҡайҙан тапты икән
Бындай серле исемде!

Серҙәре күп әле ерҙең,
Беҙгә — шуны сисергә,
Тыуған яҡта шишмәләрҙән
Ятып һыуҙар эсергә.
Алҡын һыуым, һалҡын һыуым,
Эсемкәйем, Эсемем,
Телдең тере бер тамсыһы —
Исемкәйең, исемең.

## Арғымаҡ [1]

*(Михаил Садовскийҙән)*

Тәрәндә, йырында
Юрғалай, атлыға
Кескенә бер йылға —
Ул йылғыр Арғымаҡ.
Арғымаҡ буйында
Тал ғына, тал ғына;
Һап-һалҡын һыуҙары
Һыуһынды ҡандыра.
Аға ул урғылып,
Яғымлы йыр булып:
— Әйҙәгеҙ, кинәнеп
Эсегеҙ һыуымды,
Мин һеҙгә йырлармын
Иң яҡшы йырымды.
Мин хеҙмәт итәмен кешегә,
Ат һымаҡ, тогромон эшемә.
Кем минең буйымдан
Талмайса югерә,
Оҙатып ҡуйырмын
Уны мин Иҙелгә!

---

[1] Арғымаҡ — Башҡортостандың Дүртөйлө районындағы йылға исеме.



## МАЛИН-ҠАЛА

Был уйынды төрлө яҡтарҙа төрлөсә атап йөрөтәләр: «ҡала башлығы» ла, «тау минеке» йәиһә «алтынтау» ҙа тиҙәр уны, ә беҙҙә ул — «малин-ҡала».

Малин-ҡала, малин-ҡала,
Ҡыҙыҡһынһаң, әйҙә һин дә
Уйнап ҡара, уйлап ҡара:
Ниндәй һүҙ был, ниндәй мәҙәк?
Ҡайҙан ҡалған ундай ғәҙәт?

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Кесәндә һин һынап ҡара,
Һынап ҡара, уйнап ҡара,
Юғарыға буйлап ҡара;
Беҙҙең ауыл урамында,
Ҡыштың ҡарлы буранында
Бөгөн дә бит алыш бара,
Бөгөн дә бит ярыш бара.

Ауылдағы алты малай
Бер-бер артлы еңеү яулай.
Малин-ҡала, малин-ҡала...
Әйтерһең, был — крепость-ҡала,
Шул ҡаланы алып ҡара,
Алғас, унда һис юғында

Тик бер минут тороп ҡара.
Һырғалаҡта алыш бара,
Һырғалаҡта ярыш бара,
Бераү үргә менеп бара,
Бераү, ана, елбер-елбер,
Түбән табан елеп бара.

Эй ярыштың ҡыҙған сағы,
Аҡ ҡарҙарҙың туҙған сағы,
Бала саҡтың ҡар тауҙарын
Яулай-яулай уҙған сағы!

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Бераү үргә менеп бара,
Ҡамыр батыр һымаҡ ҡына,
Ййлап ҡына, майлап ҡына,
Бик күптәрҙе еңеп бара,
Элеп алып һелкеп һала;
Әммә еңеп бөткәс кенә,
Тауға менеп еткәс кенә,
Кемдер уны төртә уңдан,
Кемдер уны төртә һулдан;
Бераү үрләй алғы яҡтан,
Бераү үрләй артҡы яҡтан,
Ундағы ла һөжүм итә,
Һулдағы ла һөжүм итә.
— Тау — минеке! — ти алдағы,
— Тау — минеке! — ти арттағы,
Арттағылар, алға сығып,
Арымайса, талмайынса,
Үрмәләйҙәр тауға тағы.

Аллы-артлы, аллы-артлы
Еңеү яулай малай заты,
Минут һайын тау башында
Ҡалҡып сыға яңы батыр.



Алмаш-тилмәш, алмаш-тилмәш,
Бер сәғәттә алты батыр
Алмашына унар тапҡыр.
(Алты түгел, кәрәк икән
Булһын бында алтмыш малай,
Алтмышы ла аллы-артлы
Тауға менеп баҫыр шулай,
Тауҙы яулап төшөр шулай.)

Алты малай, алты шалай —
Беҙҙең ауыл урамында,
Алыш бара, биреш бара
Ҡыштың ҡарлы буранында.

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Һырғалаҡта ярыш бара,
Зыҡ ҡубышып, йән-фарманға
Уйнай бында алты бала;
Еңеп сыҡты алтыһы ла,
Еңелеүсе юҡ арала.
Ғәжәп тә ул, мәҙәк тә ул,
Бына шундай малин-ҡала!

## ЫРЫМБУРЫМ — МОҢЛО ЙЫРЫМ

Ғүмеремдең бер мәлендә
Килдем бына Ырымбурға,
Ырымбурға, боронғо бер
Йәйрәп ятҡан моңло йырға.
Эй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә тағы берәй көнгә
Бында тороп ҡалаһы,
Эй Ырымбур далаһы...
Ырымбурҙа, моңло йырҙа
Заманалар тоташҡанмы,

Замананың заманаһы —
Беҙҙең дәүер тоташ данмы.
Данмы, ана, алтын дала,
Икһеҙ-сикһеҙ иген ҡыры,
Данмы дала ҡосағында
Яңғыраған иген йыры.
Данмы, данмы йәшел тугай,
Бейектәге ҡоштар юлы,
Данмы хеҙмәт фронтында
Замандаштың алтын ҡулы.
Дан түгелме далаларҙың
Ауылдары, ҡалалары,
Ауылдарҙың, ҡалаларҙың
Көләс йөҙлө балалары.

Эй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Иркен икән, күркәм икән
Далаларҙың һауаһы,
Эй Ырымбур далаһы...

Ырымбурым, моңло йырым,
Тәрәндәме тамырҙарың,
Үттеләрме замандарҙың
Елдәре лә дауылдары.
Һөйләйҙәрме, көйләйҙәрме
Ап-аҡ сәсле ҡылгандарың
Бүгәс менән Салауаттың
Бергә-бергә булғандарын;
Яландарҙа Пушкин күргән
Ырымбурҙың бурандарын;
Башҡорттарҙы, ҡанға мансып,
Каруанһарай ҡоргандарын.
Ҡылғандарҙың ҡылдарында —
Бөйөк бер көй, бөйөк бер көй —
Ун етенсе йылда тыуған
Бөйөк бер көн, бөйөк бер көн,



Эй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә инде бында бер аҙ
Йырҙар яҙып ҡалаһы,
Эй Ырымбур далаһы...

Киң далала ике атлы,
Аллы-артлы, аллы-артлы,
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Елә-саба һаман-һаман.
Офоҡтарҙа дала ята,
Төндәр үтә, таңдар ата,
Таң яҡтыһы менән бергә
Өр-яңы көн тыуа ергә.
Килер көнгә, килер көнгә
Ике һыбай саба-елә,
Береһе уның үткәндәрҙән
Аманаттар алып килә,
Икенсеһе хәҙергенең
Фармандарын тотоп елә,
Ҡулдарында ялҡын-уттар,
Ялҡын-уттар янып килә.

Эй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә шунда, илһам сәсеп,
Йырҙар йыйып алаһы,
Эй Ырымбур далаһы...

Ғүмеремдең бер мәлендә
Күрҙем әле Ырымбурҙы,
Ерҙә, һыуҙа, һауаларҙа
Йәйрәп ятҡан моңло йырҙы.

## ЙӘШӘҮҘЕҢ МӘҢГЕЛЕК ЮЛДАРЫ

Икһеҙ ҙә, сикһеҙ ҙә диңгеҙҙә
Ал елкән каруандар теҙелгән...

Йәшәүҙең мәңгелек юлында,
Айҡалып-сайҡалып тулҡында,
Ғүмерҙәр үтәләр, ғүмерҙәр.

Минең дә дауылда, елдәрҙә
Ал ебәк елкәнем елберҙәй.
Яҡынмы барыр юл, алыҫмы,
Әллә ул тик бер моң, һағышмы,
Диңгеҙҙә елкенгән елдәрҙәй.

Шатлыҡтар, хаҡлыҡтар яуларға
Каруандар теҙелгән, каруандар...
Елкенә елкәнем минең дә
Каруандар сафында диңгеҙҙә,
Йыр булып алҡынған юлдарҙа.

Киләләр ғүмерҙәр, китәләр,
Күктәрҙе күкрәтеп үтәләр,
Йәшәүҙе яратып, өҙөлөп,
Ал елкән каруандай теҙелеп,
Мәңгелек нур-йомғаҡ һүтәләр.

## ТЕЛДӘР

Телдәр ерҙә төрлө булһалар ҙа,
Хаҡлыҡ теле бары бер генә;
Минең халҡым мәңге һөйләй белер
Һөйөү һәм дә нәфрәт телендә.

## ТИГЕҘЛЕКТӘР

Тигеҙлектәр, тигеҙләмәләр,
Тигеҙ көстәр, тигеҙ нәмәләр;
Ерҙе тотҡан тигеҙ нисбәттәр,
Нигеҙ булған тигеҙ хикмәттәр...



Кешелектең ҡараштары
Шул нигеҙгә табына,
Тигеҙһеҙлек бөтһөн өсөн
Революциялар ҡабына.

## АҠ ҠАРҘАН, АҠ МОҢДАРҘАН

Яңы йылдың яңы көнө бөгөн,
Яңы көнө, яңы төҫтәре;
Яңы тыуған бала һымаҡ күреп,
Ҡаршы алам уны күтәреп.

Ҡаршы алам йылдың сабый сағын,
Аҡ биләүҙә ятҡан миҙгелен;
Был минуттар, был сәғәттәр ерғә
Алып килһен бары изгелек.

Алып килһен, кешеләрем, һеҙгә
Бәхеттәрҙең ташып торғанын,
Көнделдәргә талмаҫ ҡанат булһын
Яңы йылдың яңы йырҙары.

Өр-яңы йыл тыуа, өр-яңы йыл
Ап-аҡ ҡарҙан, ап-аҡ моңдарҙан,
Елеп бара ваҡыт толпарҙары
Аҡ мамыҡтай ап-аҡ юлдарҙан.

Аҡ мамыҡтай ап-аҡ, ай, юлдарҙа —
Сыңғыр-сыңғыр толпар сабышы,
Яңы бер йыл килә, яңы бер йыл,
Аҡ толпарҙар менән ярышып.

Аҡ толпарҙар елер, ай, был юлдар
Ерҙән алып күккә олғашҡан;
Яңы тыуған йылдың яңы көнө
Ҡош юлдары буйлап юл башлар.

Тик бер минут тороп ҡара.
Һырғалаҡта алыш бара,
Һырғалаҡта ярыш бара,
Берәү үргә менеп бара,
Берәү, ана, елбер-елбер,
Түбән табан елеп бара.

Эй ярыштың ҡыҙған сағы,
Аҡ ҡарҙарҙың туҙған сағы,
Бала саҡтың ҡар тауҙарын
Яулай-яулай уҙған сағы!

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Берәү үргә менеп бара,
Ҡамыр батыр һымаҡ ҡына,
Яйлап ҡына, майлап ҡына,
Бик күптәрҙе еңеп бара,
Элеп алып һелкеп һала;
Әммә еңеп бөткәс кенә,
Тауға менеп еткәс кенә,
Кемдер уны төртә уңдан,
Кемдер уны төртә һулдан;
Берәү үрләй алғы яҡтан,
Берәү үрләй артҡы яҡтан,
Уңдағы ла һөжүм итә,
Һулдағы ла һөжүм итә.
— Тау — минеке! — ти алдағы,
— Тау — минеке! — ти арттағы,
Арттағылар, алға сығып,
Арымайса, талмайынса,
Үрмәләйҙәр тауға тағы.

Аллы-артлы, аллы-артлы
Еңеү яулай малай заты,
Минут һайын тау башында
Ҡалҡып сыға яңы батыр.



Алмаш-тилмәш, алмаш-тилмәш,
Бер сәғәттә алты батыр
Алмашына унар тапҡыр.
(Алты түгел, кәрәк икән
Булһын бында алтмыш малай,
Алтмышы ла аллы-артлы
Тауға менеп баҫыр шулай,
Тауҙы яулап төшөр шулай.)

Алты малай, алты шалай —
Беҙҙең ауыл урамында,
Алыш бара, биреш бара
Ҡыштың ҡарлы буранында.

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Һырғалаҡта ярыш бара,
Зыҡ ҡубышып, йән-фарманға
Уйнай бында алты бала;
Еңеп сыҡты алтыһы ла,
Еңелеүсе юҡ арала.
Ғәжәп тә ул, мәҙәк тә ул,
Бына шундай малин-ҡала!

## ЫРЫМБУРЫМ — МОҢЛО ЙЫРЫМ

Ғүмеремдең бер мәлендә
Килдем бына Ырымбурға,
Ырымбурға, боронғо бер
Йәйрәп ятҡан моңло йырға.
    Эй Ырымбур далаһы,
    Далаһында — ҡалаһы,
    Әллә тағы берәй көнгә
    Бында тороп ҡалаһы,
    Эй Ырымбур далаһы...
Ырымбурҙа, моңло йырҙа
Заманалар тоташҡанмы,

Замананың заманаһы —
Беҙҙең дәүер тоташ данмы.
Данмы, ана, алтын дала,
Икһеҙ-сикһеҙ иген ҡыры,
Данмы дала ҡосағында
Яңғыраған иген йыры.
Данмы, данмы йәшел туғай,
Бейектәге ҡоштар юлы,
Данмы хеҙмәт фронтында
Замандаштың алтын ҡулы.
Дан түгелме далаларҙың
Ауылдары, ҡалалары,
Ауылдарҙың, ҡалаларҙың
Көләс йөҙлө балалары.

Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Иркен икән, күркәм икән
Далаларҙың һауаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Ырымбурым, моңло йырым,
Тәрәндәме тамырҙарың,
Үттеләрме замандарҙың
Елдәре лә дауылдары.
Һөйләйҙәрме, көйләйҙәрме
Ап-аҡ сәсле ҡылғандарың
Бүгәс менән Салауаттың
Бергә-бергә булғандарын;
Яландарҙа Пушкин күргән
Ырымбурҙың бурандарын;
Башҡорттарҙы, ҡанға мансып,
Каруанһарай ҡорғандарын.
Ҡылғандарҙың ҡылдарында —
Бөйөк бер көй, бөйөк бер көй —
Ун етенсе йылда тыуған
Бөйөк бер көн, бөйөк бер көн,



Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә инде бында бер аҙ
Йырҙар яҙып ҡалаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Киң далала ике атлы,
Аллы-артлы, аллы-артлы,
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Алһыу ҡыҙыл таңға табан
Елә-саба һаман-һаман.
Офоҡтарҙа дала ята,
Төндәр үтә, таңдар ата,
Таң яҡтыһы менән бергә
Өр-яңы көн тыуа ергә.
Килер көнгә, килер көнгә
Ике һыбай саба-елә,
Берәһе уның үткәндәрҙән
Аманаттар алып килә,
Икенсеһе хәҙергенең
Фармандарын тотоп елә,
Ҡулдарында ялҡын-уттар,
Ялҡын-уттар янып килә.

Әй Ырымбур далаһы,
Далаһында — ҡалаһы,
Әллә шунда, илһам сәсеп,
Йырҙар йыйып алаһы,
Әй Ырымбур далаһы...

Ғүмеремдең бер мәлендә
Күрҙем әле Ырымбурҙы,
Ерҙә, һыуҙа, һауаларҙа
Йәйрәп ятҡан моңло йырҙы.

## ЙӘШӘҮҘЕҢ МӘҢГЕЛЕК ЮЛДАРЫ

Икһеҙ ҙә, сикһеҙ ҙә диңгеҙҙә
Ал елкән каруандар теҙелгән...

## САНА ШЫУА БАЛА-САҒА

Ҡыҙылтауҙан, ҡыҙып-ҡыҙып,
Сана шыуа бала-саға,
Арттарында ҡар бураны,
Ҡойон булып, уйнап ҡала.

Етеҙ тайға менгәнме ни,
Елбер-елбер елә улар,
Кескәй генә саналарҙа
Тау битләүен телә улар.

Йырып барып ҡалын ҡарҙы,
Тәкмәс атып китә улар,
Ярылмаймы тауың шунда,
Донъяларын тетә улар.

Бәләкәйҙәр, һеҙҙең дә бит
Үҙ юлығыҙ бар был ерҙә,
Тауҙан-тауға, ярҙан-ярға
Ҡала һеҙҙән күпме эҙҙәр...

Ап-аҡ ҡарҙар, аҡ йондоҙҙар —
Юлығыҙҙа — шығыр-шығыр,
Эй бала саҡ, һин бит үҙең
Иң яҡты йыр, иң саф шиғыр.

## ҺАҠТА ТОРА ИЛДЕҢ УЛДАРЫ

Тыуған илем,
мәңге изге һинең
Һәр аҙым ер,
һәр ус тупрағың,
Изге
күгең,
икһеҙ-сикһеҙлегең,



Изге һинең
тере һыуҙарың.
Ерҙән —
ҡеүәт,
һыуҙан —
ҡөҙрәт алып,
Анттар биреп
халыҡ алдында,
Ыласындай
ҡыйғыр
егеттәрең
Сафта тора
һинең
һағыңда.

Һаҡта тора
батыр ил улдары,
Тыныс булһын
ауыл, ҡалалар,
Ал таңдарҙы
һөйөп уянһындар
Тауҙар,
таштар,
һыуҙар,
һауалар.

Тыуған илем,
һинең киңлектәрең
Булһын һәр саҡ
бәхет төйәге,
Бар халыҡтар
тик шатлыҡтар менән
Ҡаршы алһын
килер көндәрҙе.

Килер көндәр,
тыуыр таңдар өсөн

## ӨРШӘК АША

Өршәк аша — канатлы юл,
Өршәк аша — ҡанатлы юл.
Ярҙан-ярға — ҡорос ҡанат,
Ярҙан-ярға — ҡорос канат.
Аҙарынған, ташҡан һыуҙар,
Ярҙарынан ашҡан һыуҙар,
Ә мин бына канат-юлдан
Арғы яҡҡа барам йылдам,
Арғы яҡҡа бирге яҡтан
Үткәрелгән канат юлдан.
Йылға аша, йылдар аша
Бала саҡҡа уй олғаша...

О ул заман... Юлдар яман.
Ете саҡрым — күрше ауыл.
Хәҙер инде аңлайым мин:
Булған икән, булған ауыр.

Ете сакрым аръяғында
Ете йыллыҡ мәктәбебеҙ.
Яҙлы-көҙлә мәктәп юлын
Иртән-кисен үтәбеҙ беҙ.
Көтәп-көтәп, каникулға
Сыҡтыҡ яҙҙың бер көнөндә,
Өршәктә боҙ китмәҫ борон
Кәрәк ҡайтып өлгөрәргә!

Балаҡтарҙы төрән алып,
Кистек соҡор-саҡырҙарҙы,
Шыяларҙы уя баҫып,
Еңә барҙыҡ саҡрымдарҙы.
Килеп еттек бына бер мәл
Яҙғы һыуҙың ярҙарына;
Ауылыбыҙ тора, ана,
Ҡаршылағы ярҙа ғына.
Әммә боҙҙар күтәрелгән,
Өршәгебеҙ ташып бара,
Юлыбыҙҙы өҙгән дә ул
Ярҙан-ярға ашып бара...

Өршәк аша — канатлы юл,
Өршәк аша — ҡанатлы юл.
Канатлы юл, ҡанатлы юл,
Уйҙар һиндә ҡуҙғалдылар;
Әйтерһең дә, йөрәгемә
Кескенә бер ҡуҙ һалдылар.
Ана, ауыл, сыр-сыу килеп,
Яр буйына сыҡҡан ҡубып;
Яҙғы боҙға баҫып ҡара —
Алыр һымаҡ, алыр убып.
Алпамыша аҡтарамы —
Дебәр-шатыр ҡалҡа боҙҙар;
Уралыпмы, тулғанылмы,
Ҡайнап ята аҫта һыуҙар.



Ә беҙ бында, был яҡ ярҙа —
Ыбыр-сыбыр ун ес бала,
Ун ес бала бер ауылды
Уттан алып, утҡа һала.
Һөрәнләйҙәр апай-еңгә,
Кире ҡабат барығыҙ, тип,
Боҙ киткәнсе, ике-ес көнгә
Шунда тороп ҡалығыҙ, тип.
Был тауыштар әле һаман
Ҡолағымдан сыңлап үтә;
Әй ауылым, ул саҡтағы
Хафаларың зыңлап китә.

Тик барыбер, йән сыҡһа ла,
Ҡайтҡан ҡоштар осмай кире,
Тере йәнде тартып тора
Тыуған өйө, торған ере.
Ни бары бер илле аҙым,
Ташҡан саҡта йылға иңе,
Шул араны, ҡоштар кеүек,
Аша осоп булһа ине.
Ҡайҙа инде ул йылдарҙа
Һауаларҙа канат юлдар...
Ә шулай ҙа түгелме беҙ,
Беҙ түгелме ҡанатлылар!

Әммә бына беҙҙең алда
Ташып аға яҙғы һыуҙар.
Был ни хикмәт: йылға өҫтөн
Ҡаплап ятты яҫы боҙҙар.
Боролошта боҙ тауҙары
Тығылышҡан, тығылышҡан,
Баҙнат итһәң, үттең киттең
Ҭап ана шул тығылыштан.

Лэкин бармы, алдан төшөп,
Ҡурҡмайынса барыр кеше,
Боҙло мәхшәр араһынан
Тура юлды табыр кеше?
Булды, ахыры, булды бәхәс
Ҡаршы яҡта ошо хаҡта.
Кемдер унда, тәүәккәлләп,
Юл башланы беҙҙең яҡҡа.
Тракторсы Хәбибрахман —
Ауылдың бер ут егете,
Боҙҙан-боҙға осоп-елеп,
Был яҡ ярға килеп етте.

Бер генә һүҙ: «Әйҙәгеҙ!» — тип
Бирҙе беҙгә, бирҙе әмер.
Был әмерҙе үтәргә беҙ
Бөтәбеҙ ҙә әҙер, әҙер!
Ҡошсоҡтарҙай, сыпсыҡтарҙай,
Ҡанатланып киттек төшөп;
Алдан бара Хәбибрахман,
Беҙ барабыҙ теҙелешеп.
Боҙҙар беҙгә күперме ни —
Югереп үттек яҙғы һыуҙан;
Хәбибрахман һалған күпер
Ҡалды ғүмер юлыбыҙҙа.

Эй, күрегеҙ, Өршәк аша,
Өршәк аша — ҡанатлы юл.
Бәлки, беҙҙең күңелдәрҙә
Ҡағып торған ҡанаттыр ул,
ҡанаттыр ул.



## БӨТӘ НӘМӘ БАРЫ ҺИНЕҢ ӨСӨН

Хистәремде әйтеп бирер өсөн
Ниндәй һүҙҙәр эҙләп табырға?
Тыуған яҡтың алтын тауҙарынмы
Һиңә, йәнем, алып барырға!
Шул тауҙарҙың көмөш шишмәләрен
Уйып ҡуйырғамы алдыңа,
Күктән йондоҙ тотоп, шунымы әллә
Устарыңа илтеп һалырға!
Бөтә нәмә бары һинең өсөн,
Һинең өсөн был ер, был һауа,
Һин бойоҡһаң, болоттарҙы ярып,
Һиңә бағып, ҡояш йылмая.
Һинең өсөн Урал ҡуйынында
Моң туҡыйҙар ҡырлы ҡурайҙар,
Һиңә, һиңә, башҡорт һылыуҡайы,
Ҡурайҙарым бәхет юрайҙар.
Һиңә, йәнем, бөтә яҡты донъя,
Иркә елдәр, йылы ямғырҙар...
Ямғыр үткәс, элеп ҡуяйымсы
Юлдарыңа гәлсәр йәйғорҙар!

## ҺАҒЫНЫУ ҠОШОМ

Һағыныу ҡошом — һары һандуғасым
Ҡанат осҡайҙарын талдырып,
Йәнде ярып, осоп китте, китте,

Алыҫ ерҙә мине ҡалдырып.
Минең йырым кеүек, эй талпынып,
Осто ҡошсоҡ көнөн, төндәрен,
Иртә таңда һин тәҙрәңде асһаң,
Һөйләрмен, тип һөйөү өндәрен.
Тик тәҙрәңдә хәҙер һалҡын-рәссам
Үҙ моңонан әкиәт сиккәндер,
Шул тылсымы менән, аһ, ул яман
Ҡарашыңды йәлеп иткәндер.
Һөртөп ташла һалҡын һарайҙарын,
Ҡапламаһын әле тәҙрәңде,
Һинең менән күрешергә бөгөн
Һағыныу ҡошсоғомдо ебәрҙем.
Атылып барып, ҡошом хәбәр бирер,
Алтын көйҙәр һиңә ул тирер,
Һағыныу төҫлө һары һандуғасым
Ҡыш өҫтөндә яҙҙы килтерер.

* * *

Ҡайғылар — ҡапланған ҡара яу,
Ҡайғынан таштар ҙа ҡарая;
Янһаң ян, ҡайғынан ҡара ян,
Тик берүк, күңелем, ҡарайма.

## ЯҠТЫЛЫҠ, ҠАРАҢҒЫЛЫҠ

Юғарынан төшә яҡтылыҡ —
Был хәҡиҡәт күптән билдәле;
Ҡараңғылыҡ ҡайҙа ярала?
Был һорауға яуап юҡ әле.



## АЛТЫН УЙҘАР, АҪЫЛ ТОЙҒОЛАР

Аҡылдарың алтын булһын, тиһең,
Донъя тормай бары алтындан;
Кешеләр ҙә ерҙә төрлө-төрлө,
Төрлө уттан, төрлө ялҡындан.

Бераүҙәре айҙай алсаҡ, асыҡ,
Ҡояш һымаҡ, яҡты йөҙлөләр,
Илебеҙгә, яҡты көнөбеҙгә,
Шатлыҡ сәсеп, бәхет һиберҙәр.

Икенселәр килә — улар әле
Йырланасаҡ яҙғы йыр һымаҡ,
Ҩфоҡтарҙа һыҙылып ҡына тыуған
Бәпкә төҫлө таңғы нур һымаҡ.

Өсөнсөләр...
Алтын уйҙар, аҫыл тойғоларҙан
Өҫтөн ҡуйыр һуҡыр бер тинде,
Шундайҙарҙы күреп, шундайҙарҙы,
Күп тапҡырҙар йәнем биртенде.

Эй кешеләр! Кеҫәләрҙә түгел,
Күңелдәрҙә — донъя байлығы;
Һеҙгә булһын, алсаҡ ҡараш́лылар,
Алтын аҡыл, аҫыл уй-тойғо.

## ТОРМОШ МИҢӘ КҮПТЕ КҮРҺӘТТЕ

Тормош миңә күпте күрһәтте,
Әсе-сөсөләрен татытты;
Мин инандым бары хаҡлыҡҡа,
Хаҡһыҙлыҡтар кире ҡаҡлыҡты.

Тормош мине туҡмап өйрәттө,
Аямаҫ та булды, аямаҫ.
Абынырға бер аҙым да етә —
Ах һин, кешем, берүк, абай баҫ.

* * *

Мөғжизәнең мөғжизәһе ерҙә —
Кеше ҡулы, кеше ҡулдары.
Хеҙмәттәрен кеше ҡулдарының
Иҫәпләп тә бөтәп булмайҙыр.

Тәүтормоштан космос быуатына
Алып сыҡҡан ике ҡул булыр.
Ысын кешеләрҙең ғүмер юлы
Илгә хеҙмәт иткән юл булыр.

## ИКЕ ЮЛЛЫҠТАР

* * *

Гармония — илаһи матурлыҡ, камиллек,
Ерҙә лә, күктә лә сәнғәтсә ғалилек.

* * *

Ай ҙа яңғыҙ, тиһәк тә беҙ,
Ай янында — яҡты йондоҙ.

* * *

Йәшәүҙең терәге — әсә менән ата,
Осоуҙың серҙәре — пар ҡанатта.

* * *

Яҡшыны яҡшы тип белмәү яман,
Яманды яман тип белмәү яман.

* * *

Ямандан яҡшы тыуһа тыуһын,
Яҡшынан яман тыумаһын.

* * *

Аҡ янына ҡара төшмәһен,
Ҡап-ҡара күҙгә аҡ төшмәһен.

* * *

Бер яҡшыға — бер яҡшы, бер яманға — бер яман.
Донъяла гармония булыр әле бер заман.

* * *

Үҫтермәнеләр, ә ул үҫте.
Үҫтерҙеләр, ә был түбән төштө.

* * *

Йылғаға йылға ҡушылһын,
Йөрәккә йөрәк ҡуш булһын.

* * *

Тауға ҡарап, тау була алмаһаң да,
Кешегә ҡарап, кеше була алаһың.

## ТӨНГӨ УЙЛАНЫУ

Юлдар ауыр, тиеп
туҡтап ҡалма,
Юл юҡлыҡтан тиккә
ҡотҡо һалма,



Алға бар һин,
үҙең юл алып,
Бүтәндәргә
тура юл ярып.

Үҙәгеңде өҙһә
әсе елдәр,
Һис йылмаймай икән
һиңә көндәр,
Бер яңғыҙым, тиеп,
бойоҡма,
Дуҫтар барлығын һин
онотма.

Ҡараңғыға ҡалһаң,
ҡара яҡма,
«Ах, ҡараңғы, — тимә, —
был донъя»,
Төн ҡараһын йыртып,
үҙең яҡтырт,
Үҙең нур сәс
тирә-яғыңа.

## АЛҺЫУ УЙҘАР

Һаумыһығыҙ, алһыу алыҫлыҡтар,
Алһыу донъя, алһыу хыялдар;
Уйҙарымдың алһыу йондоҙҙары —
Киләсәктә тыуыр туғандар!

Һаумы, һаумы, иртәгәге көнөм,
Алһыуланып атыр таңдарым,
Күңелемдең алһыу хозурлығы —
Далаларым менән, тауҙарым!

Һаумы, ерҙә алһыу хыялдарға,
Алһыу уйға, хискә тоғролоҡ!
Тоғролоҡҡа тоғро булып ҡалыу
Батырлыҡҡа йәнәш торорлоҡ.



# Хикәйәттәр

## АҒӨЙРӘК МЕНӘН КҮГӨЙРӘК

Күгөйрәккәй бигерәк матур инде,
Һыу ҡойона зәңгәр күлдәрҙә,
Шатлығынан шашып китер һымаҡ,
Ҡайтып еткәс тыуған ерҙәргә.
Алыҫтағы диңгеҙ буйҙарында
Үткәрҙе ул ҡышҡы көндәрҙе,
Иркәләне, һөйҙө Күгөйрәкте
Йылы яҡтың йылы елдәре.
Тик өйрәккәй оҙон ҡыш буйына
Бик һағынды тыуған яҡтарҙы,
Тәүге тапҡыр зәңгәр күккә бағып,
Ҡанаттарын ҡаҡҡан саҡтарҙы.
Һағынды ул яҡты Киҙәгәсте,
Томбойоҡло тойоҡ һыуҙарҙы,

Һағыштарын күкрәгенә йыйып,
Татлы йоҡоларын уҙғарҙы.
Төн яғынан талғын елдәр иҫкәс,
Йәнгә яҡын күреп миҙгелде,
Ҡанаттарын ҡағып, ҡанатлылар
Күтәрелеп күккә теҙелде.
Башлыҡ ине бында ҡарт Ағөйрәк,
Урын алды төркөм алдынан;
Талпынышып эске бер өндәүгә,
Осто ҡоштар ҡайтыу яғына.
Осто ҡоштар шаулы диңгеҙ аша...
Дауыл ҡупҡан ине дарьяла;
Йәшәү менән үлем араһында
Өйрәккәйҙәр юлдар яралар.
Яңғыҙ утрау булыр. Шунда, шунда
Кәрәк бөгөн барып етергә,
Кәрәк бөгөн, аҙ-маҙ көс-хәл йыйып,
Ҡоро ерҙә ҡунып китергә.
Тилбер-тилбер ҡанат ҡағыштары
Ҡыя теләә киске һауаны,
Эй ҡошҡайҙар, тап бер оя тиклем
Күрәмһегеҙ алда ҡаяны!
Диңгеҙ уртаһында яңғыҙ утрау —
Юлсы ҡошҡайҙарҙың төйәге,
Аҡтыҡ көсөн биреп, алға бара
Ағөйрәккәй — туптың терәге.
Үҙенең ул оҙон ғүмерендә
Күп йөрөттө күктә каруанды,
Тик был юлы иҫке яралары
Алды инде, алды дарманды.
Хәлдән тайҙы башлыҡ. Тик һаман да
Ҡанаттарын ҡаҡты, ҡаҡты ул,
Ҡоро ергә етеп, өнһөҙ-тынһыҙ
Үле бер таш булып ятты ул.
Таң һарыһы менән юлға тағы
Йыйналдылар тере ҡалғандар,



Батыр Ағөйрәккәй ятып ҡала,
Кем юл башлар хәҙер каруанға?
Ерҙә генә түгел, күктә лә бит
Кәрәк һәр саҡ алдан барыусы,
Ҡайырылмаһын өсөн ҡанаттары,
Ҡалғандарға юлдар ярыусы.

Күкрәнеүҙәр тойоп күкрәгендә,
Күтәрелде күккә Күгөйрәк,
Аҫта диңгеҙ, өҫтә —
сикһеҙ киңлек,
Ҡош юлдары ята емелдәп,
Осто ҡоштар шаулы диңгеҙ аша,
Тау, йылғалар аша остолар,
Тыуған яҡтың йәшел туғайҙарын
Хыялдарға ҡушып ҡостолар.
Каруан баштарында —
Күгөйрәккәй...
Яҙлыҡмайса оҙон юлдарҙа,
Меңәр саҡрым араларҙы үтеп,
Ҡайтты ҡоштар тыуған Уралға.
Күк Уралдың арғы яҡтарында
Тулҡын ҡағып ята Киҙәгәс,
Киҙәгәстә уйнай Күгөйрәккәй,
Яҙғы төҫкә доңъя биҙәлгәс.
Киҙәгәскәй күлдең әйләнәһе —
Хәтфә үлән, ҡуйы ҡамыштар;
Яҙ шатлығы —
моңло ҡоштар йыры,
Һыуҙа, күктә тынмай тауыштар.
Өр-яңынан тыуа яҙғы доньяя,
Тыуа ерҙә яңы оялар,
Өйрәккәйҙәр, аҫыл йөрәккәйҙәр,
Ояланып тормош ҡоралар.
Йәмле йәйҙәр үтер,
көҙҙәр етер,

Теҙелешеп тағы һауала,
Ҡитғаларҙан-ҡитғаларға күсеп,
Ҡоштар шулай йәшәү юларҙар.
Күтәрелер күркәм күк йөҙөнә
Өйөр-өйөр өйрәк каруаны,
Күрерһегеҙ батыр Күгөйрәктең,
Юлдар ярып, алдан барғанын.

## ҠЫҘҘАР КҮЛЕ

Ҡыҙҙар күле, тиҙәр был ерҙе,
Кемдәр белмәй икән шул серҙе.
Уйпат ҡына ерҙә — тәрән күлме,
Әллә инде күкшел томанлыҡ,
Ике шәүлә төҫлө, ҡалҡҡан бында
Таштан уйған һындар — таш шомлоҡ.
Елдәр урап үтә был урынды,
Аяҡ ослап ҡына, сабышып;
Әллә ниндәй ауыр моң таратып,
Кәкүк көйләй үткән һағышты.
Яңғыҙ ай ҙа тып-тын тыңлап тора,
Яйлап ҡына ҡалҡа йондоҙҙар,
Ошондағы таш һындарҙы күреп,
Йондоҙҙар ҙа, ахыры, моңһоуҙар.
Ерҙең, күктең бөтә йәне шулай
Яраланғандыр ҙа ғүмергә;
Йөрәктәрҙе тетрәтерлек булып,
Һеңгән был моң минең күңелгә.
Ҡыҙҙар күле, тиҙәр был ерҙе,
Һөйләйемсе һеҙгә шул серҙе.
Сың-сың итеп, сылтыр-сылтыр килеп,
Көмөш сулпыларын сыңлатып,
Ике һылыу төштә һыу буйына,
Йөҙҙәрендә шәфәҡ уйнатып,
Бағдад көҙгөһөндәй күл өҫтөндә
Һүтә һалып ҡалын толомдо,

Көн оҙоно арып-талған һындар
Киске һыуға инеп һыйынды.
Ике аҡҡошмо ни, тулҡын сәсеп,
Сумып китеп, сәсәп, ҡыуышып,
Ер күҙенә тәүләп йәм биргәндәй,
Сайындылар, нурға тулышып.
Бар тирә-яҡ, ер, күк, ялан,
Өнһөҙ ҡалып, ҡылды тамаша;
Ҡыҙҙар тәне! Хатта һуйырташтың,
Һине күреп, йөҙө ҡамаша.
Ерем минең! (Хаҡлыһыңдыр быға)
Изге һындар менән наҙлан һин,
Ҡыҙ сафлығын, бәлки, тик һин генә,
Тап төшөрмәй, мәңге һаҡларһың.
Сит-ят күҙҙәр, әйҙә, күрмәһендәр,
Әҙәмдәрҙең теле һөйәкһеҙ,
Ҡыҙ баланы хафаларға һала
Абайламай ғына әйткән һүҙ.
Сеү, туҡтағыҙ, ниңә күл өҫтөндә
Аҡҡоштарым ҡапыл һағайҙы?
Балҡып ҡына ятҡан һыуҙың төбө
Болоҡһоноп ниңә ҡарайҙы?
Юҡ-юҡ, бер ни түгел. Ниңә инде
Ерле юҡтан улай ҡурҡырға?..
Ике егет, һеҙҙе күрмәк булып,
Яр ситенә килеп ултырған.
Ҡыҙҙар күле, тиҙәр был ерҙе,
Мин һөйләйем һеҙгә шул серҙе.
Етер, ҡыҙҙар, етер, сығыр кәрәк,
Инде бик тә һуңға ҡалдығыҙ.
Ҡолондары имеп ҡуймағайы,
Бейәләрҙе һауа һалығыҙ.
Көбөләрҙә ҡымыҙ әсегәндер,
Кем һуң бешер уны һеҙ юҡта?
Бер-бер ҡунаҡ килеп төшөүе бар,
Ут яңыртыр кәрәк усаҡта...



Ә егеттәр, ниңә, әрһеҙләнеп,
Һылыуҙарҙың юлын киҫтегеҙ?
Талған беләккәйҙәре төшөп бара,
Китегеҙсе, ай-һай, китегеҙ!
Һеҙ йәшәгән шыҡһыҙ был даланың
Таштан ҡойған һымаҡ ғәҙәте,
Намыҫына тап төшөрһә ҡыҙҙар,
Йәшәүҙең дә ҡалмай хәжәте...
Китмәнеләр. Һаман көттө улар,
Бер күреүгә шашып, йән атып,
Ай йөҙөндәй ике нур яҡтыһын
Һурып үпте ҡояш, яратып.
Һуңғы тапҡыр бағып күк йөҙөнә,
Күҙҙәренә йыйып күк төҫөн...
(Кисерегеҙ, минең телем бармай,
Выны әйтер өсөн юҡ көсөм.)
Тертләп ҡуйҙы шул саҡ бөтә ялан,
Өйөрөлдө күлдә тулҡындар,
Ә ҡояшҡай, утлы йәшен һығып,
Тәгәрәне төпһөҙ упҡынға.
Ошо хәлдең бер шаһите булып,
Таш һын һымаҡ ҡатҡан егеттәр...
Уралымдың таштарында хатта
Күпме ҡайғы, һағыш, өмөт бар.
Ҡыҙҙар күле, тиҙәр был ерҙе,
Йөрәк әрней, белгәс шул серҙе.
Быуаттарҙың хәтәр хәтирәһе —
Ошо хәбәр ҡалған хәтерҙә;
Тау битенә баҫып, шул ҡыҙҙарҙы
Көткән булам мин дә, хәҙер ҙә.
О, ни күрәм! Минең күл тигәнем —
Күкшел томан — күптән таралған;
Был үҙәндә ҡалған күк үләндәр,
Яланымда ауыр моң ҡалған.
Ҡайғыларҙан кипкән бындағы һыу,
Һәм салланған ҡырҙа ҡылғандар;

Сафлыҡты бит башҡорт һылыуҙары
Йәшәүҙән дә өҫтөн ҡуйғандар.
...Балаһынан яҙған әсә төҫлө,
Ялан ята иңрәп, һыҙланып;
Фажиғәләр ҡабат булмаһын тип,
Ҡалҡыулыҡтар баҫҡан һыҙғанып.
Ҡыҙҙар күле, тиҙәр был ерҙе,
Мин һөйләнем һеҙгә шул серҙе.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### Шиғырҙар

Йондоҙҙар . . . 3
Ҡошсоғом . . . 4
Тыуған йортом — Уралым . . . 5
Ҡанатым . . . 7
Ил йәшлеге — комсомол . . . 8
«Һандар» тигән циклдан . . . 9
Бер . . . 9
Ике . . . 9
Кеше бөйөк . . . 10
«Миллионлы халҡым, миллионлы...» . . . 10
Беҙ . . . 10
Ерем, илем, телем . . . 10
Бөйөк һыбай . . . 11
«Һинең менән, ерем...» . . . 12
Йөрәгемдә — ҡояш . . . 13
Көмөш тауыш, еҙ ҡыңғырау . . . 13
Шундай йыр йырлармын . . . 14
Һауаларҙа — йондоҙ . . . 15
Күкрәгемдә бер моң тыуҙы . . . 15
Ҡаратауҙа йәйге таң . . . 16
Мандолина . . . 18
Төнгө күгем . . . 19
Тәүге ҡар . . . 19
Шатлыҡтар . . . 20
Ваҡыт . . . 20
Бөтә нәмә алға төбәлгән . . . 21
Альпинистәр йыры . . . 21
Һаумыһығыҙ, яҙҙар! . . . 22
Мин далала тыуҙым . . . 24
Ҡылғандар . . . 25
Май айы . . . 25
Уралымдың ағын һыуҙары . . . 27

Йылғасығым . . . . . . . . . 27
Уй . . . . . . . . . . . 28
Дим . . . . . . . . . . 28
Өршәгем . . . . . . . . . 28
Стәрле . . . . . . . . . 29
Эҫемкәйем, Эҫемем . . . . . . 29
Арғымаҡ . . . . . . . . . 30

Малин-ҡала . . . . . . . . . 31
Ырымбурым — моңло йырым . . . . . 33
Йәшәүҙең мәңгелек юлдары . . . . . 35
Телдәр . . . . . . . . . . 36
Тигеҙлектәр . . . . . . . . 36
Аҡ ҡарҙан, аҡ моңдарҙан . . . . . 37
Сана шыуа бала-саға . . . . . . 38
Һаҡта тора илдең улдары . . . . . 38
«Иҫәпләп ваҡыттың яҙҙарын, көҙҙәрен...» . 40
Секундтар, минуттар . . . . . . 40
Өршәк аша . . . . . . . . . 41
Бөтә нәмә бары һинең өсөн . . . . . 45
Һағыныу ҡошом . . . . . . . . 45
«Ҡайғылар — ҡапланған ҡара яу» . . . 46
Яҡтылыҡ, ҡараңғылыҡ . . . . . . 46
Алтын уйҙар, аҫыл тойғолар . . . . 47
Тормош миңә күпте күрһәтте . . . . 47
«Мөғжизәнең мөғжизәһе ерҙә» . . . . 48
Ике юллыҡтар . . . . . . . . 49
Тенгә уйланыу . . . . . . . . 50
Алһыу уйҙар . . . . . . . . 51

Хикәйәттәр

Агөйрәк менән Күгөйрәк . . . . . . 53
Ҡыҙҙар күле . . . . . . . . . 57

*Өлкән йәштәге мәктәп балалары өсөн*

**Рашит Шакур**
**(Рашит Закирович Шакуров)**

# ГОРЫ МОИ, СТЕПИ МОИ

**Стихи, сказы**

*(на башкирском языке)*

Редакторы *Р. М. Сабитов*
Рецензенте *Р. Т. Бикбаев*
Рәссамы *Ю. А. Витковский*
Художество редакторы *В. П. Ковалев*
Техник редакторы *Н. Ғ. Фәйзуллина*
Корректоры *Н. Ғ. Кәримова*

ИБ №1715
Наборға бирелде 08. 10. 81. Баçырға ҡул ҡуйылды 24. 12. 81. Ҡағыҙ форматы $70 \times 90^1/_{32}$. Мәктәп гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баçылды. Тип ҡағыҙы № 3. Шартлы баçма таб. 2,34. Учет.-изд. таб. 2,34. Тиражы 10 000 экз.
П02381. Заказ № 304. Хаҡы 25 тин.
Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетенең Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекте, 2.

Һаҡта тора
илдең улдары.
Имен-аман булһын,
эй кешеләр,
Ер шарының
барыр юлдары!

* * *

Иҫәпләп ваҡыттың яҙҙарын, көҙҙәрен,
Сыңғырай һауала ҡоштарҙың көйҙәре;
Һауала сайҡала торналар тауышы,
Сылбырҙай сыңғырай донъяның һағышы.

Теҙелеп сылбырҙай, түгел дә торналар,
Секундтар, минуттар сыңғырап уҙалар;
Алтындай, көмөштәй был ауаз, был сыңдар
Һәр ваҡыт теп-тере булһындар, булһындар!

## СЕКУНДТАР, МИНУТТАР

Һәр секунд, һәр минут — алтын туҙансығы,
Һәр сәғәт, әйтерһең, алтындың бөртөгө;
Һәр көнөң алтынға тиң булыр, әгәр ҙә
Үтһә ул хеҙмәттә, ижадта тир түгеп.

